*Бер итексе танылған рәссам Апеллесҡа унын картинаһында итек һүрәтенен дөрөҫ эшләнмәүе тураһында әйтә. Апеллес уның был тәнҡитен ҡабул итә. Ләкин итексе, ҙур белгес һымаҡ ҡыланып, рәссамдың бөтөн картинаһын тәнҡитләй башлағас, Апеллес түҙмәй: "Әй, итексе, итектең кимәлен онотма", - тип уны туҡтата.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 МАЙ - 1 ИЮНЬ (ҺАБАНАЙ - ҺӨТАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№21 (491)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Коллоҡҡа эләккән... һәм суҡындырылған — 7

Яҡшылыҡты яманлыҡтан айырырға... өйрәтә торған булһын был дәрес — 8-9

Үлеменән һуң... үлемһеҙлеге башланды — 10

Шәриғәт буйынса кейенгәндәр... милләткә ҡурҡыныс менән янаймы? — 12

14 ТВ-программа










ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эшһеҙлек, тип көйөнгәнсе, эшҡыуарлыҡҡа тотон, тибеҙ ҙә ул. Ә эшҡыуарлыҡ сифаты һәр кемдә бармы һуң?

***Илнур ВӘЛИЕВ, Өфө ҡалаһы, туризм өлкәһендә эшләүсе эшҡыуар:*** Эшҡыуарлыҡты һәр ваҡыт уңышҡа илтеүсе һәм килем килтереүсе өлкә, тип ҡарарға ярамай, сөнки бында өмөттәр өҙөлөү, ҡәнәғәтһеҙлек кисереү, хыялдарҙың селпәрәмә килеүе, ышаныстың ҡаҡшауы кеүек күренештәр, бәлки, күберәктер ҙә. Ләкин энтузиазмды юғалтмайынса, бер уңышһыҙлыҡтан икенсеһенә хәрәкәт итеү уңышлы булыуҙың бер сере, тип билдәләр инем. Тормошҡа ашмаҫ маҡсаттар булмай, бары тик ялҡаулыҡ, зирәклектең етмәүе һәм күп һылтауҙар эҙләү генә маҡсаттарына ҡамасаулай, үҙендә ошоларҙы еңеп сығырҙай көс таба алһаң, барыһы ла һин теләгәнсә буласаҡ. Шулай уҡ белемде камиллаштырыу буйынса ла эшләү зарур, сөнки көн дә үҙгәреп торған юғары технологиялар заманында йәшәйбеҙ һәм ошо талаптарға яуап биргәндә генә уңышҡа өлгәшергә мөмкин. Был хаҡта билдәле эшҡыуар Михаил Прохоровтың: "Тәүҙә аҡсаны белемгә, унан һуң белемде аҡсаға эшләтеү кәрәк. Был бөтә үҫештең дә моделе", - тигән фекере дөрөҫтөр, тип уйлайым. Быны аңлар өсөн уның бизнес өлкәһендә билдәгән урынына күҙ һалыу ҙа етә.

Ғөмүмән, кеше ни өсөн эшләй? Дөрөҫ, аҡса табыу һәм шул аҡса ярҙамында лайыҡлы тормош көтөү өсөн. Ләкин кемдер быының өсөн көн дә иртән тороп, бәлки, күңеленә ятып бөтмәһә лә, дәүләт эшенә йөрөй, ә кемдер үҙ эшенән ләззәт тә, килем дә ала. Икенселәр рәтенә, күп осраҡта, уңышлы эшҡыуарҙы индерергә була. Ләкин эшҡыуарлыҡҡа тотонорҙан алда барыһын да яҡшылап уйлап, төрлө яҡлап үлсәп эшләү мөһим. Бер ҡасан да аңламаған, энәһенән-ебенә тиклем төшөнмәгән идеяны тормошҡа ашырырға тырышырға кәрәкмәй. Бынан бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Мәҫәлән, ғүмер буйы ҡалала йәшәгән кеше бөгөн килеп ауылда мал үрсетә аласаҡмы? Бәлки, үрсетер ҙә, ләкин быының хаҡы үтә лә ҡиммәткә барып төшәсәк. Йәки интернет селтәрендә эшләүҙең бар нескәлектәрен дә белмәгән кеше нисек итеп был өлкәләге бизнеста уңышҡа өлгәшә алһын?

***Зөлфәр РЫСБАЕВ, юғары уҡыу йортон тамамлаусы белгес:*** Эшҡыуарлыҡҡа ҡағылған фекерҙәр бихисап. Кемдер ауыҙ һыуын ҡойоп, был өлкәне маҡтай, ә икенселәр эшҡыуарлыҡтан алыҫыраҡ тороуҙы хуп күрә. Мин үҙем икенселәр рәтенә инәм. "Тырышлыҡ кәрәк, үҙ көсөңә ышаныу мөһим" һәм башҡа ошондай матур һәм яңғыраулыҡ һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Телевизор, радионан да эшҡыуарлыҡты үлтереп маҡтайҙар. Унда ҡараһаң, эшҡыуарҙарҙың барыһы ла уңышлы, бәхетле һәм дәүләткә рәхмәтле. Ә ни өсөн үҙ эшен башлап та, төрлө кәртәләргә осраған, тырышып та бер ни килтереп сығара алмаған кешеләрҙе күрһәтмәйҙәр? Юҡмы ни улар? Әлбиттә, бар һәм хатта уңышлыларына ҡарағанда күберәктер ҙә әле. Күптәр ауылда магазин асып, ҡайҙалыр тингә һатылған әйберҙе һумға әйләндереп аҡса эшләүселәрҙе эшҡыуарҙар рәтенә ҡуя. Был төптө хата фекер, сөнки улар бары тик алыпһатар ғына.

Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең бер сығышында: "Кем яңы эш аса, предприятиеларҙы иҫәпкә ҡуя, ҡыйыулыҡ өсөн миҙал бирергә кәрәк", тигәйне. Ошо һүҙҙәр артында, кем нисек кенә һөйләмәһен, эшҡыуарлыҡ тураһында бар хәҡиҡәт ярылып ята, тип әйтергә була. Һәм ул хәҡиҡәт эшҡыуарлыҡтың бик ауыр һәм ҡатмарлы өлкә булыуын асыҡ дәлилләй. Ләкин һәр кемдең үҙ уйы, үҙ фекере, шуға күрә бик теләгән кеше берәһенең дә һүҙенә ҡарамайынса, үҙ эшен асырға йөрьәт итәләр, тип уйлайым.

(Дауамы 2-се биттә).

ХХI БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# АЙЫҠЛЫҠ ӨСӨН КӨРӘШ...

## Тереһыу өсөн көрәшкә тиң

**"Урал батыр" эпосына кешелектең йәшәү программаһын билдәләрҙәй бик күп фекер-идеялар һалынған, шуларҙың береһе: "Яуыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшеүсе үҙе лә шул юлға баҫа, шуның өсөн изгелек өсөн көрәшеү фарыз". Ысынлап та, Урал батыр бер туған ағаһы Шүлгәндең яуыҙлыҡҡа хеҙмәт итеүен белгән хәлдә лә, уны өс тапҡыр ҡулға төшөргән осраҡта ла, тере ҡалдыра, үлтермәй. Урал батыр тәүҙә яуыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшә, аҙаҡ был ғәмәленең яуыҙ көстәрҙе арттыра ғына барыуын аңлап, икенсе юл һайлай: дейеүҙәр, ен-пәрейҙәр, аждаһалар рәүешендәге яуыҙлыҡ менән тулған күлде эсеп, һәләк була, кешелеккә иһә Тереһыу бөркә...**




(Дауамы 6-сы биттә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эшһеҙлек, тип көйөнгәнсе, эшҡыуарлыҡҡа тотон, тибеҙ ҙә ул. Ә эшҡыуарлыҡ сифаты һәр кемдә бармы һуң?

(Башы 1-се биттә).

**Кинйәбай АҠСУЛПАНОВ, Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы, фермер:** Ер эше менән күптән шөғөлләнәбеҙ. Тәүге йылдарҙа ауырға тура килде, техника, сәсеү-йыйыу өсөн кәрәкле ҡоралмалдарҙың етмәүе бәкәлгә һуҡты, ләкин был ғәҙәти күренеш, тип ҡарарға кәрәктер, сөнки һәр эште лә башлап ебәреү еңелдән түгел. Ләкин тырышҡанда бар ҡыйынлыҡтарҙы ла еңеп сығырға мөмкин. Эшебеҙҙе 25 гектар майҙанда башлағайныҡ, бөгөнгө көндә 154 гектарға еткерҙек. Хужалыҡта йыл әйләнәһенә, миҙгеленә ҡарап, ғаиләбеҙҙән тыш 2-8 кеше эшләй. Ошо йылдар эсендә шулай уҡ хужалыҡты кәрәкле техника һәм ҡоралмалдар менән тәьмин итеүгә өлгәштек, ашлыҡ һәм һалам өсөн аҙбар төҙөнөк, көҙөн йыйып алынған уңыштың һатыу юлдарын да яйға һалдыҡ.

Һуңғы йылдарҙа эшҡыуарлыҡҡа булған ҡараш та ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, эшҡыуарлыҡҡа тотоноу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылды. Мәҫәлән, фермер булараҡ, был өлкәләге перспективаны һәйбәт, тип билдәләр инем. Ғөмүмән, Башҡортостанда фермерлыҡ өҫтөнлөклө урында булырға тейеш, сөнки беҙҙең халыҡ ергә береккән, ерҙең тын алышын яҡшы аңлай һәм ер менән эш итә белә. Ләкин шәхси фермерлыҡҡа ғына ышанып, колхоз-совхоздарҙы, күмәк хужалыҡтарҙы бөтөрөү хата буласаҡ, сөнки улар бер-береһенә конкуренция булдыра, ә был, үҙ сиратында, бер урында тапанмаҫҡа, тырышырға, яңы юлдар табырға этәреүсе көс булып тора. Ваҡытында бөтә Рәсәй буйлап колхоз һәм совхоздарҙы бөтөрөү башланды, ә беҙҙең республика етәкселегенең быға юл ҡуймауы дөрөҫ булды. Беҙҙең илдә ауыл хужалығы өсөн бар яуаплылыҡты фермер елкәһенә генә һалыу дөрөҫ түгел, сөнки ул әлегә был ихтыяжды тулы кимәлдә ҡәнәғәтләндереүгә әҙер түгел. Шулай уҡ хәҙер фермерҙар, колхоз-совхоздар, ғөмүмән, төрлө өлкәлә эшләүсе эшҡыуарҙар дәүләт тарафынан ныҡлы ярҙам ала. Ләкин дәүләт ярҙамына ғына өмөт итеү дөрөҫ түгел, күберәген бары тик үҙеңә ышанырға кәрәк. Хөкүмәт тә был ярҙамды күрһәтеүҙә бер аҙ яңылышыраҡ эшләй, тип уйлайым. Был өлкәгә яңы килгән, бөгөн-кисә генә эшҡыуар булараҡ теркәлгәндәргә ҙур суммала аҡса бүлә. Минеңсә, был ярҙам төбәктә бернисә йыл рәттән уңышлы эшмәкәрлек алып барған эшҡыуарҙар араһында бүленһә, яҡшыраҡ булыр ине. Ләкин кешелә нәҫелдән, ҡандан килеүсе һәләт булмаһа, дәүләт ярҙамы ла, тырышлыҡ та эшҡыуарлыҡта уңышҡа алып килмәйәсәк.

Эшҡыуарҙы уңышҡа илтеүсе сифаттар - ул етдилек, башҡарған эшең өсөн яуаплылыҡ тойоу, бергә эшләгән кешеләргә иғтибарлы булыу, уларҙың эшен тейешенсә баһалау, теге йәки был ситуацияны алдан күҙаллай белеү. Тағы ла мөһим фактор - ул ныҡлы рухи терәктең, йәғни һине аңлаған, һәр ваҡыт терәк булырҙай ғаиләң булыуы. Барлыҡ ошо факторҙар берләшмәһә генә эшҡыуарлыҡта уңыш ҡаҙанырға мөмкинлек бирә.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

БАШ ЙОРТТА...

# ҺӘЙБӘТ АҒАЙ ҺӘМ АПАЙҘАР...

## беҙҙең Өфөлә йәшәй



**Өфө хаҡында күп фекер ишетергә була. Баш ҡала халҡы ла, ҡунаҡтар ҙа күңеленә яҡҡан йә оҡшап етмәгәндәр хаҡында бүлешергә бик әүәҫ. Шулай ҙа иң дөрөҫ һәм эскерһеҙ һүҙҙәрҙе бала ауыҙынан ғына ишетергә мөмкин. Ошоно иҫәпкә алып, беҙ Өфөлә йәшәүсе балаларҙан да баш ҡала хаҡында фекерҙәрен әйтеүен һораныҡ.**

**Азамат ЯҠШЫГИЛДИН, 7 йәш:** Мин Өфөнө бик яратам, сөнки ул минең тыуған ҡалам. Бында ҡыҙыҡлы урындар күп: парктар, музейҙар, фонтандар, төрлө аттракциондар. Беҙ ял һайын атайым, әсәйем һәм һеңлем менән Өфө урамдарында йөрөргә яратабыҙ. Атай-әсәй йәйен беҙҙе туңдырма менән һыйлай, ә ҡышын төрлө тәмлекәстәр һатылған урындарға алып йөрөй. Унда балалар күп була һәм мин улар менән уйнайым, яңы дуҫтар табам. Тағы ла миңә урамда ағастарҙың һәм сәскәләрҙең күп үҫеүе оҡшай, сөнки укытыусы "Кешегә йәшеллек бик кәрәк", ти. Ә бына юлдарҙың насар булыуы оҡшамай. Юлдан барған саҡта мин гел әсәйемде йә атайымды етәкләп кенә йөрөйөм, сөнки соҡорға эләгеп йығылыуҙан ҡурҡам. Бер йығылғайным инде, аяғым оҙаҡ ауыртып йөрөнө. Мин тағы ла урамда елеп йөрөгән машиналарҙы күҙәтергә яратам. Улар бик күп, шулай булғас, Өфөлә аҡсалары күп кешеләр йәшәйҙер, тип уйлайым. Ләкин уларҙың күбеһе автобус, тиҙ ярҙам, ут һүндереү машиналарына юл бирмәй. Улай эшләргә ярамай, сөнки улар кемдеңдер ғүмерен ҡотҡарырға, ашыға бит. "Тотоп кәрәктәрен бирергә ине", ти атайым, шуға күрә мин үҙемә машина алғас, гел генә уларға юл бирәсәкмен, сөнки атайымдан әләгеүҙән ҡурҡам.

**Тимур ХӘЛИЛОВ, 6 йәш:** Мин "Дуҫлыҡ монументы" янында йәшәйем. Беҙҙең тәҙрәнән Ағиҙел йылғаһы һәм унда йөҙөп йөрөгән пароходтар күренә. Мин уларҙы фильмдағы караптар менән сағыштырам. Тағы ла мин кисен тәҙрәнән ҙур күпер аша Өфөгә килеүсе машиналарҙы күҙәтергә яратам. Барыһы ла Өфөгә ҡунаҡҡа килергә ярата, күрәһең, сөнки кешеләр тейәлгән машина, автобусҡа тар бик күп үтә. Әсәйем: "Өфө - иң ҙур һәм иң яҡшы ҡала", - ти. Мин дә шулай уйлайым, сөнки магазинға йәки башҡа ергә ингәндә мин һаулыҡ һорашһам, барыһы ла яуап бирә, ә былтыр беҙ барған икенсе ҡалала улай итмәнеләр. Өфөлә һәйбәт ағайҙар һәм апайҙар йәшәй. Әсәйем менән автобусҡа инһәк, беҙгә урын бирәләр, ә үҙҙәре баҫып торорға ла ризалар. Мин шулай уҡ балалар баҡсаһына йөрөргә яратам. Атайым миңә: "Улым, һиңә эш урынын саҡ таптыҡ, йөрөмәһәң, эштән сығаралар", - ти. Эш урыны, тип, ул минең балалар баҡсаһын шаяртып әйтә. Шуға күрә көн дә иртән атайәсәйемә бәлә һалмай ғына йоҡонан торам, эш урынымды юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡам. Тағы ла мин ял көнө әсәйем менән китап һатылған магазинға барырға яратам. Унда матур һүрәтле китаптар шул тиклем күп! Ләкин әсәйем йыш ҡына миңә уҡырға башҡорт телендә китап тапмай аптырай. Әллә йәлләйҙәрме икән ундай китаптарҙы магазинға һалырға, тип уйлайым. Үҙҙәре генә уҡый, күрәһең.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.**

Кем **"Киске Өфө"**гә май айында яҙылған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: **3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына, 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" тигән китабына эйә буласаҡ. Ҡалған уҡыусыларыбыҙға иһә "Айыҡ туй сценарийҙары" китабын бүләк итәсәкбеҙ.**

● Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе** лә хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең Хакимиәтенә инвестициялар һәм кадрҙар буйынса ике республика комиссияһы булдырырға ҡушты. Тәүгеһе Башҡортостанда тормошҡа ашырыуға тәҡдим ителгән инвестиция проекттарын ҡараясаҡ. Кадрҙар буйынса комиссия республиканың министрлыҡ, ведомство һәм дәүләт предприятиеһы етәкселәре вазифаларына кандидаттарҙы тыңлаясаҡ. Ике комиссияға ла Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселек итәсәк.

✓Лондондағы XXX йәйге Олимпия уйындарында илдең йыйылма командаһы составында Башҡортостан данын - биш, ә XIV Паралимпия уйындарында 19 спортсы яҡлаясаҡ. Рәсәй йыйылма командаһына Лилиә Шобухова менән Григорий Андреев (еңел атлетика, марафон), Реналь Ғәниев (фехтование), Антон Анчин (йөҙөү) һәм Елена Савельева (бокс) эләккән. Башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда Паралимпия йыйылма командаһы составында Башҡортостан вәкилдәре - иң күбе.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Бәләбәй районына эш сәфәре барышында Бәләбәйҙәге аҙыҡ-түлек магазиндарының береһенә инде. Республика башлығы айырыуса урындағы етештереүселәрҙең продукцияһы менән ҡыҙыҡһынды. Әммә кәштәләрҙәге продукттарҙың ҙур өлөшө башҡа төбәктәрҙән килтерелгән булыуын күреп, Ауыл хужалығы министрлығына аҙыҡ-түлек баҙарындағы хәлдәрҙе анализлап, уны урындағы тауар менән тулыландырыу сараһын күрергә ҡушты.

✓Төп темаһы "25-20" стратегияһы: инструменттар, ресурстар һәм тормошҡа ашырыу юлдары" тип билдәләнгән "Урал арьяғы-2012" инвестицион төбәк-ара форумы 8-9 июндә Сибайҙа үтәсәк. Форумда 250-нән ашыу кеше ҡатнашырға тейеш. Программала - Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Инвестицион мөхитте яҡшыртыу буйынса йәмәғәт советы ултырышы, сәнәғәтте һәм ауыл хужалығын, туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһын үҫтереүгә, шулай уҡ экологик проблемаларға, алдынғы банк һәм финанс технологияларына арналған түңәрәк ҡорҙар. Республика ҡунаҡтары һабантуйҙа ла ҡатнашасаҡ.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БЫЛ ДОНЪЯ - БЕСӘН ҠЫУЫШЫ...

**Үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә барып еткән Лев Толстойҙы башҡорттар араһында булыуы ваҡытһыҙ үлемдән аралаған. Кемдер өсөн был фекер хәҙерге көн күҙлегенән сәйер ҙә яңғырай торғандыр, әммә яҙыусының "Тәүбә итеү" әҫәре һәм күп һандағы көндәлек яҙмалары, төрлө шәхестәр менән хатлашыуҙары быны бермә-бер раҫлай.**



Әлбиттә, яҙыусы үҙенең бер яҙмаһында ла "Башҡорттар мине үҙ-үҙемә ҡул һалыуҙан ҡотҡарҙы, улар араһында булып ҡайтҡандан һуң, тормошҡа мөнәсәбәтем ҡырҡа үҙгәрҙе" тип белдермәй, әммә уның башҡорттар араһында булғандан һуң артабанғы тормош ағышының ыңғай яҡҡа үҙгәреүе юҡтан ғына килмәй. Алда әйткәнебеҙсә, Лев Толстой башҡорттар араһында булғандан һуң үҙ-үҙенә ҡул һалыу ниәтенә тиклем алып барып еткергән күңел төшөнкөлөгөнән ҡотола, дөрөҫөрәге, тормошҡа кире ҡайта. Уға башҡорттар араһына барырға буласаҡ ҡайныһы, кәләше Софьяның атаһы доктор Андрей Берс кәңәш итә. Башҡорттар араһына китер алдынан яҙыусы дуҫтарына, таныштарына шундай һүҙҙәр әйтә: "Унда миңә бер ниндәй гәзит тә, хат та килмәйәсәк, мин хатта унда китаптың нимә икәнен дә онотасаҡмын. Салҡан ятып ҡорһағымды ҡояшҡа ҡыҙҙырып, ҡымыҙ эсәсәкмен һәм һарыҡ ите ашаясаҡмын! Шул сағында үҙем дә һарыҡҡа әүереләсәкмен һәм шуның менән һауығасаҡмын..."

Шулай итеп, ай ярым самаһы Кәрәлек буйында ял итеп ҡайтҡандан һуң Толстой "Тәүбә итеү" әҫәрендә яҙылған ул саҡтағы Рәсәй ысынбарлығына бәйле ауыр һәм күңелһеҙ уйҙарынан арынып, үҙенә башҡорттар араһына барырға кәңәш биреүсе доктор Андрей Берстың ҡыҙы Софьяға өйләнә һәм башы-аяғы менән ғаилә мәшәҡәттәренә сума, бар донъяға битараф әлекке батша армияһы һалдатынан өлгөлө ғаилә башлығына әүерелә. Был ут уға ун биш йылға етә.

1871 йылда яҙыусы Кәрәлек буйына икенсегә килә һәм тағы ла ике ай самаһы башҡорттар араһында йәшәй. "Бында килгәнгә тиклем мине нимәләр борсоһа, хафаларым һәм бар нәмәгә битараф булыуым юҡҡа сыҡты, үҙемде скифтар һымаҡ тоям, миңә бында барыһы ла ҡыҙыҡ һәм яңы... Күп нәмә ҡыҙыҡ һәм яңы, Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар ҙа..." тип хат яҙа ул ҡатыны Софья Андреевнаға. Уның "барыһы ла юҡҡа сыҡты" тип атаған кәйеф торошон беҙ, башта әйткәнебеҙсә, Толстойҙың "Тәүбә итеү" әҫәренән уҡып беләбеҙ ҙә инде.

Толстой Кәрәлек буйынан Александр Фетҡа ла хат яҙа. Һәр бер тәржемә, һәр бер сағыштырыу аҡһай, тигәндәй, яҙыусының кәйефен үҙ асылында аңлар өсөн шағирға хатынан өҙөктө төп нөхсәһендә килтерәйек: "Здесь очень хорошо и значительно все... Если бы начать описывать, то я исписал бы сто листов, описывая здешний край и мои занятия. Край здесь прекрасный, по своему возрасту только что выходящий из девственности, по богатству, здоровью и в особенности по простоте и не испорченности народа..."

Әлбиттә, был һүҙҙәр яҙыусы тарафынан башҡорттарға ярарға тырышыуҙан сығып әйтелмәгән, етмәһә, Толстой башҡорттар хаҡындағы ошондай фекерҙәрҙе кемгәләр ҡасандыр яҙған хаттарында әйткән саҡта уларҙың бер көн килеп йәмәғәтселек иғтибарына йәлеп ителере хаҡында ла уйламағандыр. Тимәк, ул ни уйлаһа, шуны яҙған. Был - беренсенән, икенсенән, тотош халыҡ тураһында шундайын Геродот һынлы Геродотҡа тиңләрлек фекерҙәрҙе әйтеү өсөн дә ниндәй оло яуаплылыҡ һәм фиҙаҡәр ҡыҙәтеүсәнлек кәрәк. Әлбиттә, яҙыусы беҙҙең эраға тиклем 400-500-се йылдарҙа йәшәүсе боронғо грек тарихсыһы Геродотты иҫкә алып, иң беренсе нәүбәттә башҡорттарҙың боронғо һәм, тарихсыһын грекфарсы һуғыштарын сағылдырған киң билдәле "Тарихтар" тип аталған әҫәрендә сағылғанса, яугир халыҡ икәнлеген әйтергә теләгәнә көн кеүек асыҡ. Тимәк, башҡорттарҙың тарихын өйрәнгән Толстой улар хаҡында Геродот осорона бәйле мәғлүмәттәргә лә эйә булған, тип әйтергә лә тулы нигеҙ бар бында.

1862 йылдан алып егерме йыл һуҙымында яҙыусы башҡорттар араһында барлығы ун тапҡыр була һәм уның көндәлектәренән, дуҫтарына, туғандарына һәм ҡәләмдәштәренә яҙған хаттарынан сығып фекер йөрөткәндә, Толстойҙың ошо йылдар эсендә башҡорттар тормошон төплө итеп өйрәнеүе күренә. Күп кенә сығанаҡтар буйынса, яҙыусының Кәрәлек буйҙары, Ырымбур ере, башҡорттар һәм уларҙың еренә күсеп килеүселәр хаҡында роман яҙырға йөрөгәне билдәле. Яҙыусының төрлө сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан тәржемәи хәленә таянып, ҙур күләмле был әҫәрҙең яҙылмай ҡалыуына ике төрлө сәбәпте нигеҙ итеп килтерергә булалыр:

-беренсеһе, 1880 йылда яҙыусының үҙе яҙған барлыҡ әҫәрҙәренән баш тартыуы;

-икенсеһе, 1890 йылда Николай Икенсенең ҡушыуы буйынса Рәсәйҙең барлыҡ сиркәүҙәре юғары учреждениеһы - Святейший Синод тарафынан Толстойҙың сиркәүҙән ситләтелеүе.

Ә инде яҙыусының киң билдәле "Һуғыш һәм солох" романына килгәндә, Толстой уны 1863-1869 йылдарҙа, йәғни башҡорттар менән тығыҙ аралашҡан саҡта ижад итә. Тарихта теләк-шарт һөйкәлеше булмай, тиҙәр, шулай ҙа яҙыуҙан ғына түгел, ғөмүмән, йәшәүҙән төңөлгән яҙыусының 1862 йылда Кәрәлек буйы башҡорттары араһында булып ҡайтҡанынан һуң бер йыл үткәс, шундайын эпохаль әҫәргә тотона алыуы ла күп нәмә тураһында һөйләй бит. Кем белә, бәлки, яҙыусыға был романын яҙа башлар өсөн, үҙе әйтмешләй, "Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар" сәбәпсе булғандыр?

Икенсенән, һәр яҙыусы әҫәрҙәренең төп геройҙарына үҙенең уй-кисерештәрен һала, тигән логиканан сығып ҡарағанда, кенәз Андрей Болконский йөҙөндә беҙ "Тәүбә итеү" әҫәрендәге Лев Толстойҙы ла таныйбыҙ. Болконскийҙың да, Толстойҙың да йәш саҡтары батша армияһында хеҙмәттә үтә, улар икеһе лә үҙенең йәшәү маҡсатын - "Тулонын" ватанға хеҙмәт итеүҙә һәм шул юлда дан ҡаҙаныуҙа күрә. Андрей Болконский Аустерлиц яланында ауыр яраланып ятып ҡала һәм аҙаҡтан япраҡтарын ҡойоп, ботаҡтарын йәмһеҙ тарбайтҡан ҡарт имәндә үҙен таный һәм йәшәүенең мәғәнәһеҙлеген аңлай. Ә Толстой иһә, "Тәүбә итеү" әҫәрендә яҙғанынса, йәшәүҙән төңөлөп, үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә барып етә. Әммә күңел ҡайтыуҙары, донъянан төңөлөүҙәр ваҡытлыса ғына икән, донъяла бөндәне һәр төрлө һәләкәттән ҡотҡарыр оло мөхәббәт бар. Андрей Болконский Наташа Ростоваға, Лев Толстой Софья Берсҡа өйләнә. Андрей Болконский яҙын шаулап япраҡ ярған ҡарт имәнгә, Лев Толстой Геродот еҫе аңҡыған башҡорттарға ҡарап күңел балҡыуы кисерә. Был осраҡлы ғына тап килеү түгел, әлбиттә.

Толстойҙың көндәлектәрендә, хаттарында башҡорттар тормошо хаҡындағы күп һандағы күҙәтеүҙәре теркәлеп ҡалған. Уларҙың барыһында ла яҙыусы был халыҡтың хәйләһеҙ тәбиғәт балаһы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала, халыҡтың аҙға ғына риза булып, үҙ нәфсеһен тыйып йәшәй белеүенә һоҡлана һәм шул арҡала ситтән килеүселәргә арзан ғына хаҡҡа ерҙәрен һатыуына көйөнә. "Кешегә күпме ер кәрәк?", "Ильяс" хикәйәләрендә сағыла уның бындай һоҡланыуҙары һәм көйөнөүҙәре. Нимә генә булмаһын, "Был донъя - бесән ҡыуышы" тип йәшәгән, Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар XIX быуат аҡыл эйәһенең тормошонда ниндәй роль уйнауы хаҡында һөйләй был дәлилдәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 20-се һанда.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы "Һөт малсылығын үҫтереү һәм һөт етештереүҙе арттырыу. 2012-2016 йылдарға "Башҡортостан Республикаһында 500 һөт-тауар фермаһын комплекслы яңыртыу" айырым маҡсатлы республика программаһында ҡатнашыусыларҙы һайлап алыу һәм уларға ҡатнашыусы статусын биреү өсөн конкурс иғлан итә. Ул республиканың ауыл хужалығы ойошмалары араһында үткәрелә. Ҡатнашыу өсөн дәғүәселәргә раҫланған форма буйынса заявка һәм тулы документтар пакетын тапшырырға кәрәк. Уларҙың өлгөләре министрлыҡтың рәсми сайтында бирелгән. Конкурс комиссияһы 450008, Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 106, 237-се кабинет адресы буйынса эшләй, телефоны: (347)273-42-41.

✔ 2012 йылда республикала 112 һандарыу аша оператив хеҙмәттәргә шылтыратыу буйынса берҙәм система төҙөү эштәре старт ала. Белгестәр фекеренсә, ҙур күләмдә техник эштәр үткәрергә, атап әйткәндә, үткәргес селтәрҙәр әҙерләргә, 112 системаһына шылтыратыуҙарҙы эшкәртеү өсөн унификацияланған программа-технологик комплекслы үҙәктәр төҙөргә тура киләсәк. Монтажлау, сафҡа индереү, берҙәм система составында эшләүгә һәләтле булыуҙы тикшереү эштәрен ике этапта үткәреү ҡаралған. Беренсе этап - 2012- 2015 йылдар, икенсеһе 2016 йылдан алып 2017 йыл аҙағына тиклем тип билдәләнгән.

✔ Йәйге отпускылар миҙгелендә "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан Ларнакаға (Кипр) һәм Барселонаға (Испания) даими рейстар асыла. Кипрҙың иң боронғо ҡалаларының береһе менән тура авиабәйләнеште авиакомпания 29 апрелдә үк булдырған. Ул ваҡытта аҙнаһына бер рейс башҡарылған, әммә 30 майҙан осоштар йышлығы аҙнаһына ике тапҡырға тиклем артасаҡ. Испанияның курорт ҡалаһы Барселонаға самолет 1 июндән 28 сентябргә тиклем аҙнаһына бер тапҡыр осасаҡ.

✔ Быйыл тәүге дүрт ай эсендә Башҡортостанда 17586 бала, 9117 малай һәм 8469 ҡыҙ тыуған. Яңы тыуған сабыйҙар араһында 171 игеҙәк һәм 4 өс игеҙәк бар. 2011 йылдағы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда, төбәктә тыуым күрһәткестәренең артыуы күҙәтелә. Бынан тыш, 2012 йыл башында уҡ билдәләнгәнсә, ғаиләләрҙә икенсе һәм өсөнсө бала табыу осраҡтарының артыуы һаҡлана. Ә бына яңы тыуған сабыйҙың уртаса ауырлығы һәм буйы былтырғы кимәлдә ҡалған һәм әүәлгеса 52,12 сантиметр менән 3,35 килограмға тиң.

**"Башинформ"дан.**

*✓ РФ-ның Мәғариф тураһындағы законында һәр бер бала үҙенең туған телендә уҡырға хаҡлы һәм мәктәп, мәғариф органдары һәр балаға үҙенең туған телендә уҡыһын һәм тәрбиә алһын өсөн шарттар тыуҙырырға тейеш, тиелгән.*



ФЕКЕР ҠОРО

**Өфө ҡалаһының М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейында үткән аҙнала мөһим ваҡиға булды. Күренекле педагог, халыҡ мәғрифәтсеһе һәм республиканың әүҙем йәмәғәт эшмәкәре Мөхәмәт Исҡужинға барельефлы мемориаль таҡтаташ асылды. "Илебеҙҙә беҙҙең һымаҡ ике, бер миллион, йөҙ мең иҫәбендәге халыҡтар туҡтауһыҙ үҙенең теле, мәҙәниәте, рухы өсөн көрәшеп йәшәй. Шуға ла беҙгә бына тиклем дә көрәшеп йәшәү яҙмышы төштө, артабан да көрәште һис кенә лә кәметергә ярамайҙыр, сөнки берәү ҙә беҙҙе хуплап, әйҙәгеҙ, үҫегеҙ, бына һеҙгә программалар, милли мәғариф компоненттары, теләгәнегеҙсә уҡытығыҙ, тип өндәшеп тормай. Үҙебеҙ Хоҙай ҡушҡан, Конституцияла билдәләнгән хоҡуғыбыҙҙы күкрәк ҡуйып яҡлап йәшәргә мәжбүрбеҙ", - тигәйне таҡтаташты асыу тантанаһында сығыш яһап Рәшит Шәкүр. Башҡорт телен уҡытыуҙа ниндәй проблемалар бар, беҙ бөгөн нимә өсөн көрәшергә бурыслыбыҙ - сара сиктәрендә уҙғарылған республика ғилми-ғәмәли конференцияһы ҡатнашыусылары ошо һорауға яуап эҙләне.**

# ТУҒАН ТЕЛ ӨСӨН...

## көрәш туҡтамай

**Нәйлә БУРАНҒОЛОВА, Өфөләге 104-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:** Быйылғы беренсе кластар яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса уҡыны һәм уларға дәүләт теле булараҡ башҡорт теле уҡытылманы, сөнки был яңы стандарттарҙа ҡаралмаған. Хәҙер башҡорт теле уҡытыусыларын бер һорау борсой: башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү яйлап бөтөрөлмәҫме икән? 10-11-се кластар башҡорт телен уҡымай, ул беренсе класта ла уҡытылмаһа, был борсолоу ысынбарлыҡҡа әүерелмәҫме? Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла башлағандан алып, күпме эш тәртипкә һалынды, методик ҡулланмалар, китаптар, электрон дәреслектәр сығарылды. Уҡытыусылар тупланды, улар белемдәрен камиллаштырҙы, фәнни эштәр яҙҙы. Йәмғиәт тә, сит милләттәр ҙә башҡорт телен өйрәнеүҙе заман талабы итеп ҡабул иткәйне, хәҙер кәрәкмәй, тип, ошо ҡаҙаныштарҙы юҡҡа сығарабыҙ булып сығамы инде? Киләсәктә яңы федераль белем биреү стандарттарына ниндәйҙер төҙәтмәләр индерелергә тейештер, тип уйлайым.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:** Рәсәй сәйәсәтенең берҙәм Рәсәй гражданы яһарға маташыуы бәләкәй милләттәрҙең теленә, тарихына, мәҙәниәтенә зыян килтермәй ҡалмай. Шуны аңларға кәрәк: берҙәм Рәсәй гражданының теле берәү генә - рус теле генә буласаҡ. Шуның өсөн беҙҙең алда сәйәси мәсьәләләр тора. Әлбиттә, йәмәғәтселәр сәйәсмән түгел, әммә сәйәси ойошмаларға, сәйәси партияларға йәмәғәтселек кенә йоғонто яһай ала.

Һуңғы йылдарҙа оптималләштереү һөҙөмтәһендә башлыса башҡорт ауылдарында мәктәптәр ябылып бөтөп бара. Бында халыҡ үҙе лә ғәйепле, сөнки был мәктәптәрҙә уҡыр өсөн балалар юҡ, тиҙәр. Элек бит класта ике уҡыусы булһа ла, мәктәптәр эшләй торғайны. Хәҙер беҙ ете йәшлек баланы автобусҡа ултыртып, сит ауылға, етмәһә, урыҫ, татар мәктәбенә уҡырға ебәрәбеҙ. Киләсәктә был проблеманы хәл итеүҙең берҙән-бер юлы булып интернаттар асыу тора. Башҡорт балалары башланғыс кластарҙы үҙенең ауылында уҡыһа, артабан интернатта тәрбиәләнһен, ошоға ынтылырға кәрәк беҙгә.

Шулай уҡ Башҡортостанда ғына хәл итеп булмай торған проблемалар бар. Шуларҙың береһе - башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ һаҡланыуы. Ҡыҙғанысҡа күрә, һуңғы ваҡытта сәйәсәт беҙгә тағы ҡаршы килә. Был мәсьәлә урындағы етәкселәребеҙҙән дә тора. Улар бөгөн дәүләт теле көсләп уҡытыла, тигән ҡарашты ҡысҡырып әйтеүҙән тартынмай. Көсләп уҡытыу нисек була һуң? Улайға китһә, географияны ла, урыҫ телен дә, математиканы ла уҡыусыларға уларҙың ихтыярынан тыш уҡытабыҙ. Бында, мотлаҡ уҡытыу, тигән һүҙбәйләнеш ҡулланылырға тейеш. Ә был иһә көсләп уҡытыу түгел. Дәүләт телен уҡытыуҙы тыйырға ярамай, ул РФ Конституцион судының ҡарары менән дә яҡлана. 2004 йылда үткән был суд ҡарары аныҡ башҡорт теленә бәйле булмаһа ла, ул башҡа республикаларҙың дәүләт телдәренә лә ҡағыла. Әгәр ҙә дөйөм белем биреүгә һәм аттестация алыуға ҡамасауламаһа, Конституцияға ярашлы, республикаларҙа дәүләт телдәрен уҡытыу рөхсәт ителә, тиелә унда. Башҡортостанда - башҡорт, Татарстанда - татар, Саха-Яҡут республикаһында яҡут теле уҡытыу арҡаһында аттестат алмаған бала тарихта юҡ. Шуға ла бер генә ведомствоның да, бер генә вазифалы шәхестең дә республикала дәүләт телен уҡытыуға ҡаршы һүҙ әйтергә хоҡуғы юҡ. Иң көнүҙәк мәсьәлә - ул туған телде һаҡлау һәм үҫтереү. Дәүләт телен һаҡлап ҡалабыҙ, тибеҙ икән, уны ҡулланыу даирәһен киңәйтергә тейешбеҙ. Был йәһәттән үҙебеҙ эшләп еткермәйбеҙ, мәҫәлән, рәсми хаттарҙы русса яҙабыҙ. Бөгөн 37 процент башҡорт балаһы, башҡорт телендә уҡыта һәм тәрбиә бирә, тигән статусы булған мәктәптә уҡый. Балаларҙың 63 проценты башҡорт телен предмет булараҡ ҡына өйрәнә. Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙан туҡтау менән, 50 процент балалар башҡорт телен өйрәнә алмаясаҡ. Шуға ла дәүләт теле статусын һаҡлауҙы беренсе бурыстарыбыҙҙың береһе итеп ҡарарға тейешбеҙ.

**Фәнзил САНЪЯРОВ, Башҡорт дәүләт университеты доценты:** Һуңғы егерме йыл эсендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу матур ғына юлға һалынып киткәйне. Ҡыҙғанысҡа күрә, РФ Мәғариф министрлығы ҡабул иткән яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, ҡайһы бер мәсьәләләр туған телде уҡытыуҙы ауырлаштырҙы. РФ-ның Мәғариф тураһындағы законында ла, БР-ҙың Мәғариф тураһындағы законында ла, һәр бер бала үҙенең туған телендә уҡырға хаҡлы һәм мәктәп, мәғариф органдары һәр балаға үҙенең туған телендә уҡыһын һәм тәрбиә алһын өсөн шарттар тыуҙырырға тейеш, тиелгән. Балалар хоҡуғы тураһында конвенция статьяларында ла был хоҡуҡ һыҙыҡ өҫтөнә алына. Шуға ла беҙҙең талаптарыбыҙ юридик һәм хоҡуҡи нигеҙле, бөгөн беҙ республикала һәр бер мәктәптә белем биреү ниндәй телдә алып барылыуына ҡарамаҫтан, туған телдәрҙе уҡытыуҙы һәм дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороға тейешбеҙ.

Әгәр ҙә йәмәғәт ойошмалары, ата-әсәләр ҡыҫылмаһа, был мәсьәләне хәл итеүҙә Мәғариф министрлығы ғына артыҡ бер нәмә лә эшләй алмай, тигән фекерҙәмен. Әлбиттә, халыҡта әүҙемлек кәмене хәҙер, уларҙа власть органдарына ышанмау көслө, сөнки күпме генә шауламайыҡ, РФ Мәғариф министрлығы үҙенең программаларын тормошҡа ашырыуҙы дауам итә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ниндәй генә кәртәләр ҡоролоп ҡуймаһын, беҙ милли республикаларҙа үҙебеҙҙең телебеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ. Ошоно РФ Мәғариф министрлығынан талап итергә хоҡуҡлыбыҙ. Рәсәй күп милләтле төбәк, милли телдәрҙе һаҡлағанда ғына уның киләсәге бар. Тарих һабаҡтарына күҙ йомоп, тағы ла бер тапҡыр моно милләттән торған йәмғиәт төҙөһәк, бер үк тырмаға баҫасаҡбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ике тел дәүләт теле булып иҫәпләнгән илдәрҙә, бигерәк тә, беҙҙең республика кеүек милли төбәктәрҙә аралашыуҙың ҡайһы өлкәһендә теге йәки был тел ҡулланылырға тейеш тигән һорау һәр ваҡыт сәйәси проблема тыуҙырыуы ғәҙәти күренеш. Ҡағиҙә булараҡ, дәүләт идаралығы, закондар сығарыу теле өҫтөнлөклөрәк һаналасаҡ, сөнки тап ул рәсми тел иҫәпләнә. Бөгөнгө көндә дәүләт башҡорт теле, был нисек кенә ҡыҙғаныс яңғырамаһын, дәүләт символы сифатында ғына сығыш яһай. Шуға ла конференцияла ҡатнашыусыларҙың ғәҙел билдәләүенсә, беҙгә иң тәүҙә уның ҡулланыу даирәһен киңәйтергә кәрәк. Ә бына туған телдәргә килгәндә, ғәмәлдә булған бөтөн закондарҙың һәр кешенең туған телен өйрәнеүгә булған хоҡуҡтарын яҡлағанын белә тороп та, һаман ошо мәьәләгә нөктә ҡуя алмауыбыҙҙы нисек аңлатырға?**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*УРА!*

# ӨФӨ КИОСКЫЛАРЫНДА...

## һыра һатылмаясаҡ!

**Ағымдағы йылдың 1 июленән Өфөлә транспорт туҡталыштары эргәһендәге киоскыларҙа һыра һатыу тыйыласаҡ. Был сикләү былтыр ҡабул ителгән законға ярашлы индерелә. Уның буйынса, һыра башҡа алкоголле эсемлектәргә тиңләштерелә.**

Хәҙер урамда, йорттар эргәһендә, ҡала парктарында, баҙарҙарҙа һәм башҡа йәмәғәт урындарында һыра эсеү тыйыла. Эсемлекте туҡланыу урындарында йәки өйҙә генә ҡулланырға мөмкин. Шулай уҡ, законға ярашлы, спирты 5 проценттан артыҡ булған һыра стационар магазиндарҙа ғына һатылырға тейеш буласаҡ. Ларек-киоскыларҙан ундай эсемлек һатыуҙан алына. Балалар баҡсаһы, мәктәп, спорт учреждениелары янында шулай уҡ һыра һатыу тыйыла. 2012 йылдың 1 ғинуарынан иһә, быға өҫтәп, яңы талаптар индерелә. Киске 11 сәғәттән алып иртәнге 8-гә тиклем һыра һатып алыу мөмкинлеге булмаясаҡ. Кафе, бар, рестурандарға был талап ҡағылмай. Дөйөм майҙаны 50 квадрат метр тәшкил иткән магазиндарҙа ғына һыра һатыу рөхсәт ителәсәк. Эсемлек пластик һауыттарҙа һатылмаясаҡ. Киләһе йылдан был эсемлекте радио-телевидениела, йәмәғәт транспортында рекламалау тыйыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов 12 июндә Өфөлә 1812 йылдағы Бөйөк Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған тантаналы саралар үткәреү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Ул көндө театрлаштырылған тамаша Ленин майҙанында 11 сәғәттән 13.30 сәғәткә тиклем үткәреләсәк.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сираттағы киңәйтелгән ултырышында Урта быуат Башҡорт ҡалаһын (Өфө-II ҡаласығы) һаҡлау, фәнни яҡтан өйрәнеү һәм музей төҙөү тураһындағы, шулай уҡ республиканың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш районларында башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу торошо мәсьәләләре ҡаралды.

✓Эстонияла Палдиски ҡалаһы көндәре сиктәрендә Һабантуй байрамы үтәсәк. Быйыл ул 14 июлдә үтә һәм Балтика илдәре Йәштәр һабантуйы тип аталасаҡ, тип хәбәр итте Эстонияның "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни үҙәге рәйесе Флүзә Хәйруллина. Байрамға Латвия, Эстония, Финляндия, Башҡортостандан ҡунаҡтар саҡырылған.

✓Штрафтар тураһында белергә, һалым буйынса бурыстарҙың күләмен асыҡларға, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә, табипҡа ҡабул итеүгә яҙылырға - Башҡортостандың почта бүлексәләрендә хәҙер ошо һәм башҡа бихисап хеҙмәттәрҙән файҙаланырға мөмкин. Ауырғазы районында үткән "Электрон муниципалитет-2012" Бөтә Рәсәй форумында Федераль почта элемтәһенең БР буйынса идаралығы билгестәре почта аша дәүләт хеҙмәттәре күрһәтеү мөмкинлеге менән таныштырҙы.

✓28 майҙа баш ҡаланың "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында Белорет районы көнө үтә. 15 сәғәттә мәҙәниәт һарайы фойеһында ҡаланың тарихы һәм социаль-иҡтисади үҫеше хаҡында һөйләгән "Белорет - кисә, бөгөн, иртәгә" күргәҙмәһе асыла. 19 сәғәттә Белорет районынан сыҡҡан танылған сәнғәт оҫталары һәм районның иң яҡшы ижади коллективтары ҡатнашлығындағы ҙур байрам концерты үтә.

✓Силәбе өлкәһе Копейск ҡалаһының крайҙы өйрәнеү музейында "Башҡорт мәҙәниәте көндәре"н ябыу тантанаһы үтте. Был проектты музей Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Копейск ҡалаһындағы бүлексәһе менән берлектә ойошторҙо. Бер аҙна эсендә күргәҙмә экспозициялары менән 750-нән ашыу кеше танышҡан.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

**Эшҡыуар булыу еңел эш түгел. Эшҡыуарға аҡса һәм уңыш үҙенән-үҙе яуып тормай. Әле күптән түгел генә эшҡыуарлыҡ тураһында башҡа төрлө уйлаған йәмәғәтселек тә быны аңлай башланы хәҙер. Сөнки күптәр сараһыҙҙың көнөнән, эшһеҙлек шауҡымынан ҡотолоу өсөн ошо өлкәне үҙләштерергә ынтылып ҡараны һәм…**



# ЭШҠЫУАРҒА...

## кем кәртә ҡора?

Эйе, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген үҙләштереү юлында ауырлыҡтар бихисап. Иң төп ауырлыҡ - административ кәртәләр. Улар иҫәбенә шәхси эшҡыуар булараҡ теркәү үтеү процедураһынан башлап, эшмәкәрлекте лицензиялау, бухгалтер иҫәбен алып барыу, һалым мәсьәләләрен хәл итеү, сертификация үтеүҙә килеп тыуған мәсьәләләр, төрлө күҙәтеү һәм контроль инспекциялары тарафынан уҙғарылған тикшереүҙәр инә. Быйыл ғинуар-март айҙарында республика территорияһында уҙғарылған эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенә ҡамасаулаусы административ кәртәләр мониторингы ла быны раҫлай. Ошо мониторинг һөҙөмтәләре күптән түгел Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Дәүләт аҡсаһын һөҙөмтәле тотоноу буйынса йәмәғәт контроле советының сираттағы ултырышында ҡаралды.

Совет ағзаһы Николай Самойленко белдереүенсә, быңдай административ кәртәләр эшҡыуарҙарҙың бик күп ваҡытын сарыф итеүгә, финанс яҡтан ифрат ҙур сығымдарға килтерә. Шул уҡ ваҡытта был процедураларҙың барыһы ла закон тарафынан ҡаралған һәм яйланған, улар бер ниндәй ҙә проблемалар тыуҙырмаҫҡа тейеш. Ләкин ысынбарлыҡта хәлдең тап киреһе күҙәтелә. Быңдай кәртәләр, үҙ сиратында, эшҡыуарҙарҙың үҙ эшмәкәрлеген артабан киңәйтеүгә булған инициативаһын һүндерә.

Совет ултырышында Башҡортостанда эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә кире йоғонто яһаусы бер-нисә факторҙы ла билдәләп үттеләр. Улар араһында ҡайһы бер чиновниктарҙың сәбәпһеҙ һәм хоҡуҡи яҡтан дөрөҫ булмаған ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килтереүе, урындағы үҙидаралыҡ органдарында, муниципаль унитар предприятиелар-ҙа эшҡыуарҙарҙан кәрәкле ҡағыҙҙарҙы ҡабул итеүҙең анығ ваҡыты билдәләнмәүе, документтарҙың кәрәгенән артыҡ оҙаҡ ҡаралыуы, урындағы власть органдарының үҙ биләмәһендә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә битараф ҡалыуы, ер участкаһы һәм төҙөлөш өсөн документтарҙың оҙаҡ рәсмиләштерелеүе кеүек мөһим факторҙарҙы айырып ҡарарға була.

Мониторинг һөҙөмтәләренән сығып, Советтың эшсе төркөмө төбәктә эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә ҡамасаулаусы административ кәртәләрҙе кәметеүгә һәм бөтөрөүгә ҡағылышлы бер-нисә тәҡдим индерҙе. Беренсе сиратта, федераль, республика һәм урындағы норматив хоҡуҡи акттарҙағы ҡапма-ҡаршылыҡтар эшҡыуарҙар файҙаһына эшләргә, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъектының теге йәки был дәүләт (муниципаль) органына һәр мөрәжәғәте махсус журналда теркәлергә, мөрәжәғәттәрҙе ҡарау ваҡыты ике тапҡырға ҡыҫҡартылырға, эшҡыуарҙың мөрәжәғәте йәки һорауы кире ҡағылған осраҡта, яуап мотлаҡ рәүештә дәүләт (муниципаль) ойошмаһы етәксеһе ҡултамғаһы менән яҙма рәүештә, кире ҡағыуҙың хоҡуҡи нигеҙҙәре күрһәтелеп бирелергә тейешлеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Эшсе төркөм шулай уҡ "берҙәм тәҙрә" принцибына ҡоролған эш ҡоролошон булдырыуҙы ла тәҡдим итте, сөнки был осраҡта эшҡыуарҙар төрлө инстанциялар буйлап йөрөп ваҡыт сарыф итмәйәсәк, ә бер урында барлыҡ мәсьәләләрен хәл итеү мөмкинлеге аласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күрһәтелгән административ кәртәләр күптән хәл итеүҙе көтә, ләкин быны өсөн һүҙҙән эшкә күсеү, күптән ташҡа баҫылған бихисап тәҡдим, норматив һәм хоҡуҡи акттарҙы бер туктауһыҙ өйрәнеп, төҙәтеүҙән арынып, эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн реаль шарттар тыуҙырыуға күсеү мөһим. Бары тик шул саҡта ғына эшҡыуарлыҡ өлкәһе халыҡта ҙур ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ һәм ошо өлкәгә ылыҡтырасаҡ, ә был, үҙ сиратында, республика иҡтисадының үҫеүенә, тимәк, йәшәйешебеҙҙең яҡшырыуына килтерәсәк.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

Яңы законды һыра менән кәсеп итеүселәр бик борсолоп ҡабул итте. Сөнки закон тейешенсә эшләй башлаһа, уларҙың кесәһенә һуғасаҡ. Хәҙер эш урындары кәмейәсәк, бәләкәй эшҡыуарҙар өсөн ҡыйынлыҡтар тыуҙырыласаҡ, тип, улар аҙымдың хаталы булыуын аңлатырға маташа. Улар фекеренсә, хәлдә тыйыуҙар аша түгел, ә халыҡты "мәҙәни эсергә" өйрәтеү аша үҙгәртергә кәрәк. Һыра эшкәртеүселәр һәм һатыусыларҙың күбеһе хәҙер һыра барҙары асыу тураһында уйлана. Әммә үҙҙәре үк билдәләүенсә, рәсәйлеләрҙең матди хәле быңдай аҙымға барырға мөмкинлек бирмәй. Барҙа спиртлы эсемлек ҡиммәтерәк буласаҡ бит.

Йәмәғәтселек араһында законды хуплаусылар ҙа, уға шикләнеп ҡараусылар ҙа бар. Күбеһе дәүләткә ышанмай, үҙгәрештәрҙе сираттағы күҙ буяу тип ҡабул итә. Ысынлап та, спирты 5 проценттан кәмерәк тәшкил иткән һыра эсемлегенә атап үтелгән тыйыуҙар ҡағылмай. Әммә ниндәй генә һыра булмаһын, ул ағыу бит. Ниндәйен генә эсмә, аңың томаланасаҡ. Законды үҙ көсөнә индереүҙе килһә йылға тиклем һуҙыуҙары ла шик тыуҙыра. Ул ваҡытҡа тиклем талаптарҙы йомшартҡан үҙгәрештәр индерелеүе лә ихтимал.

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәлиуллин: "Һыра һатыуҙан туҡтаған һатыу нөктәләрендә килем 30 процентҡа кәмейәсәк. Эшҡыуар өсөн был күләмле сумма, әлбиттә, үҙгәрештәр уның кәсебен сикләйәсәк. Тап һыра һәм тәмәке - иң күп һатылған тауар булғанға, эшҡыуарҙар яңылыҡты борсолоп ҡаршылай, - ти.- Ләкин халыҡтың сәләмәтлеге мөһимерәк. Шуға күрә, яңы закон - уйлап һәм ваҡытлы яһалған аҙым, тип иҫәпләйем".

Киоскыларҙа һыра һатыуҙан алынһа ла, йәйгелеккә асылған урам кафеларында был эсемлек иркеле һатыла. Өфөлә йәйге кафе майҙансыҡтары быйыл 169-ға барып еткән. Марат Ғәлиуллин әйтеүенсә, ҡала округы хакимиәте тарафынан эшҡыуарҙарға тундырма, кеүәҫ кеүек тауарҙар ҙа һатырға кәңәш ителә. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ял итеүселәрҙең байтағы кафеларға тап һыра эсеп ултырыр өсөн инә икән.

**Мәһәҙи МОРАТОВ.**

Аһ-Аһ!

## ТАЛПАНДАР

**Яҙ иртә килеү сәбәпле, талпандар бик иртә уянды. Өҫтәүенә, улар быйыл көндән-көн ауҙемләшә бара. Рәсәйҙең баш санитар табибы Геннадий Онищенко биргән мәғлүмәттәр буйынса, Свердловск, Кемерово өлкәләрендә һәм Башҡортостанда талпан ҡаҙалыусылар һаны - иң юғарыһы.**

Башҡортостанда талпан ҡаҙалыусылар һаны былтырғыға ҡарағанда ике тапҡырға артҡан. Күршеләрҙә лә хәл бик яҡшынан түгел: Пермь, Удмурт, Алтай крайында, Төмән, Киров, Ҡурған өлкәләрендә талпан ҡаҙалыу осраҡтары арта бара. Мәскәүҙә талпан ҡаҙалыу буйынса 2178 кеше медицина ярҙамы һорап мөрәжәғәт иткән, беҙҙә уларҙың һаны 4433-кә барып еткән. Бынан тыш, тикшереүҙәрҙән һәр дүртенсе талпан энцефалитлы булыуы асыҡланған. Белгестәр фекеренсә, талпан ҡаҙалыу сезоны июнь айы бөткәнсе һуҙыласаҡ.

## КАРТУФ КӨЙӘҺЕ

**Колорадо бөжәгенән ыҙалауыбыҙ етмәгән, Өфө совхоздарының береһендә яңы бәлә - картуф көйәһе барлығы асыҡланған. Кеше һаулығына зыян килтермәһә лә, был күбәләк картуфты тиҙ ваҡыт эсендә зарарлай ала. Ҡороҡҡос хатта картуфты ҡаҙып алып, һаҡлағысҡа һалған та үрсеүен дауам итә. "Россельхознадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәре әлеге көндә был совхоздың теплицаларын, баҫыуҙары тикшерә.**

Картуф көйәһе - бик зыянлы ҡороҡҡос. Картуфтан тыш, ул томат, баклажан, ҡабаҡ, боростарҙы ла ашай. Бигерәк тә үсенте һәм бүлбеләргә зыян килтереүсе ҡарышлауыҡтары ҡурҡыныс. Картуф көйәһе табылған урындарҙа ерҙе көҙөн-яҙын тәрән итеп ҡаҙалар һәм картуфты иртә ултырталар. Үҫемлектәрҙе бейек итеп күмергә, уңыш йыйыр алдынан картуф һабаҡтарын ҡырҡып алырға кәрәк. Белгестәр шулай уҡ мөғәрәптә аҡбур менән аҡларға, эшкәртергә кәңәш итә. Картуф көйәһенә ҡаршы колорадо бөжәгенә ҡарата ҡулланылған барлыҡ сараларҙы ла файҙаланырға мөмкин.

## КҮБӘЛӘКТӘР

**Ҡырға, баҡсаға сыҡҡан кешеләр иғтибар иткәндер (хәйер, улар Өфө урамында ла осоп йөрөй): ҙур, ап-аҡ, ҡарап тороуға нәфис кенә күбәләктәр күпләп пәйҙә булды тирә-йүндә. Был бигерәк тә баҡсасыларҙы хафаға һалды: үсентеләр һәм уңыш өсөн зыянлы түгелме икән улар?**

"Йәй иртә килде, эҫе көндәр ҙә ғәҙәттәгенән иртәрәк башланды, шуға күрә күбәләктәр ҙә иртәрәк барлыҡҡа килде. Улар ҙа, үҙҙәренең ҡарышлауыҡтары кеүек үк, уңыш өсөн бик зарарлы ҡороҡҡостар,- тип һөйләй ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Гизәр Мансуров. - Йәшелсә-емеш, сәскә, иген культуралары өсөн айырыуса хәүеф килтерә улар. Талымһыҙ был ҡороҡҡостар үсентенең бөтә өҫкө өлөшөн: сәскә бөрөләрен, япраҡтарын, һабаҡтарын да ҡыра. Йәй аҙағына тиклем күбәләктәр ике-өс быуын үрсеп өлгөрә - уларҙың тағы ла күбәйеүе ихтимал әле. Баҡсағыҙҙы ҡороҡҡостарҙан һаҡлау өсөн мотлаҡ махсус препараттар менән эшкәртегеҙ".

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## АЛЛЕРГИЯ

❖ 1 ҡалаҡ әрем үләнен ярты литр һыуҙа яртыһы ҡалғансы ҡайнатырға. Ашағандан һуң көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр балғалаҡлап ҡабул итергә;

❖ тағы бер уникаль рецепт: 5 ҡалаҡ ваҡланған ҡарағай энәһен, 2 ҡалаҡ гөлйемеш емешен, 2 ҡалаҡ һуған ҡабығын бер литр һыуға һалып, ҡайнау хәленә еткерергә һәм 10 минут талғын утта ҡайнатырға. Төнгөләккә йылы итеп урап ҡуйығыҙ. Һөҙөргә һәм тәүлегенә 0,5 литрҙан 1,5 литрға тиклем йылы көйөнсә эсергә. Хәлегеҙ 3 көндән яҡшырыр;

❖ 2-шәр ҡалаҡ цикорий, һары мәтрүшкә, бәйғәмбәр тырнағы (календула), эт дегәнәгенә (череда) 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, термоста төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә;

❖ 1 литр ҡайнар һыуға бер ус самаһы өлгөрөп еткән фасоль ҡуҙаҡтарын (ҡабығын) һалып, 3-5 минут ҡайнатырға, 1,5-2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. 2-3 көн эсендә балалар ҙа, ололар ҙа һауығасаҡ;

❖ көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алдан 1-2 балғалаҡ сельдерей тамыры һуты ҡабул итергә. Һутты тамыр төнәтмәһе менән алыштырырға була. Бының өсөн 2 ҡалаҡ ваҡланған тамырға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут талғын утта йылытырға. Шулай уҡ 1-2 ҡалаҡ тамырҙы 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә була. Уны ашарҙан 20 минут алда көнөнә өс тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә;

❖ организмдың сафлығы (шул иҫәптән китап саңына) кире реакцияһы булһа: 4 өлөш һары мәтрүшкә, 5 өлөш һарыгүҙ (золототысячник), 3 өлөш иҙелгән бәпембә тамыры, 2 өлөш баҫыу ҡырҡбыуыны (полевой хвощ), 1 өлөш кукуруз һеркәһе (кукурузные рыльца), 1 өлөш аҡ сәскә, 4 өлөш иҙелгән гөлйемеште бергә болғатырға. Ошо ҡатнашманы 4 ҡалаҡ алырға һәм 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыуға һалып, төнгөләккә ултыртып торорға. Иртәнсәк утҡа ҡуйып, ҡайнау хәленә еткерергә, тағы бер сәғәт төнәтергә. Алты ай буйына айына 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Хәрәкәт башында тороусы йәштәр абсолют айыҡлыҡ яҡлы. Сөнки самаһыҙ эсеүселәр донъянан китте йә ғүмерлек ғәрипкә әүерелеп ҡалды, ә "мәҙәниәтле" эсеүселәр профессиональ эскесегә әүерелде.*



*XXI БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*

# АЙЫҠЛЫҠ ӨСӨН КӨРӘШ...

## Тереһыу өсөн көрәшкә тиң

**(Башы 1-се биттә).**

Башында йәштәр торған "Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимағи хәрәкәте ағзаларының мәшһүр эпосыбыҙға һалынған ошо хәҡиҡәтте тәрән аңлап эш итеүе уларҙың был изге башланғыҫын һәр йәһәттән күркәм итә. Сөнки Рәсәй батшалығы һәм совет осоронда эскелеккә ҡаршы көрәштең нимәгә алып килеүе барыбыҙға ла мәғлүм. Ҡулына рюмка алып, эскелеккә тамам бирелгән кешене был афәттән дүндереүгә ҡарағанда, йәш кешене айыҡ, бөхетле, сағыу һәм тулы ҡанлы тормошҡа күндереү күпкә отошлораҡ. Шуға күрә был ижтимағи хәрәкәттең "Айыҡ Башҡортостан" тип аталыуы ла күп нәмә тураһында һөйләй. Эйе, хәрәкәттең башында тороусы йәштәр халыҡҡа Тереһыу бөркөүҙең, айыҡлыҡ өсөн көрәш алып барыуҙың күпкә отошло икәнен яҡшы аңлап эш итә. Төн ҡараңғылығын нисек кенә әрләмә, бынан ғына төн яҡтырмаясаҡ

20 майҙа баш ҡалабыҙ Өфөнөң "Конгресс-холл" бинаһында "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәтенең Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы һәм "Киске Өфө" гәзите менән берлектә ойошторған "Айыҡ ауыл-2011" конкурсының йомғаҡлау сараһы - Гала концерты үтте. Сарала конкурсҡа йомғаҡ яһалып, еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы ойошторолдо. Бүләкләү, тигәндән, эсмәгән, йәғни айыҡ тормош алып барған өсөн аҡсалата йәки башҡа формала дәртләндереү бүләге алыуҙың еңел булмаған ошо заманда ниндәй әһәмиәткә эйә булыуын аңлатып тороу кәрәкмәйҙер. Конкурста республикабыҙҙың 41 районынан 99 ауыл ҡатнашып, финалға утыҙҙан ашыу ауыл үтте. Конкурстың еңеүселәре итеп Салауат районының Көсәпәй, Әбйәлил районының Ҡырҙас, Йылайыр районының Ишбулды ауылы табылып, уларға 200-әр мең һумлыҡ сертификат тапшырылды. Тағы ла бик күп ауылдар төрлө номинацияларҙа еңеүсе тип табылып, аҡсалата премияларға лайыҡ булды. Конкурсты үткәреүҙә, шулай уҡ киң матбуғат сараларында яҡтыртыуҙа әүҙем ҡатнашыусылар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалманы.

Ижтимағи хәрәкәткә дәүләт органдарының, атап әйткәндә, Башҡортостан Республикаһы Йәштәр сәйәсәте һәм спорт, Һаулыҡ һаҡлау, Мәғариф, Элемтә һәм киң мәғлүмәт саралары министрлыҡтарының, Рәсәй һәм Башҡортостан киң мәғлүмәт сараларының, республикабыҙ ауыл һәм ҡалалар хакимиәттәренең ҡушылыуы ла йәнде йылыта, тимәк, киләсәктә йәштәр нигеҙ һалған был башланғыс дауам итәсәк, халыҡ менән дәүләттең дөйөм маҡсатына әүерләсәк.

Тағы ла шуныһы ҡыуаныслы: айыҡлыҡ юлына баҫыусы ауылдарҙа аҡһаҡалдар ҡорҙары, ҡатын-ҡыҙҙар һәм йәштәр советтары үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән, йәғни ауыл йәмәғәтселеге тәрән йоҡонан уянып, бер маҡсатта ойоша башлаған. Улар боронғо йолаларын иҫәнә төшөрөп, төрлө саралар, айыҡ туйҙар үткәрә башлаған, көмөшкә ҡыуыусыларҙы һәм эсергә яратыусыларҙы иҫәпкә алып, уларҙы дөрөҫ юлға төшөрөү буйынса эш башлаған. Йәғни, айыҡлыҡ өсөн башланған был хәрәкәт ауылда йәшәүсе халыҡтың тормош хәлен, йәшәү рәүешен яҡшыртыу, тулы ҡанлы итеүгә булышлыҡ итәсәк, Алла бойорһа. Быныһы инде - иң мөһимелер.

Әйткәндәй,ошо конкурсты ойоштороусыларҙың береһе булған "Киске Өфө" йыл дауамында айыҡ йәшәү рәүеше тураһында материалдар биреү менән генә сикләнмәй, айыҡ коллектив булараҡ, башҡаларҙы ла ошо изге башланғысҡа ҡушылырға саҡырып сығыш яһаны, шулай уҡ "Айыҡ туй сценарийы" конкурсы ойошторо, ул сценарийҙарҙы китап итеп баҫтырып сығарҙы.

Хәрәкәт башында тороусы йәштәр абсолют айыҡлыҡ яҡлы. Сөнки тотош илебеҙ эскән үткәнебеҙ шуны күрһәтә: самаһыҙ эсеүселәр донъянан китте йә ғүмерлек ғәрипкә әүерелеп ҡалды, ә "мәҙәниәтле" эсеүселәр профессиональ эскесегә әүерелде. Эскелек - хурлыҡ, тиҙәр, ә хурлыҡтың аҙ ғына миҡдарҙағыһы булмай. Эскелек - хурлыҡ та, ялған ғорурлыҡ та. Ул хурлыҡты һәм ул ялған ғорурлыҡты күптән Урал ташына яра һуғырға ваҡыт, туғандар! Таш түҙер әле...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**




*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Мәүҙиға БАЙМӨХӘМӘТОВА, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауыл хакимиәте башлығы:** Мәктәптә уҡытыусы булып эшләгәндә ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе вазифаһын да үтәргә тура килде. Шул мәлдәрҙә айыҡлыҡ хәрәкәтен йәйелдереү эшенә тотонғайныҡ. Ләкин ул ваҡытта власть органдары, йәмәғәт ойошмалары был эшкә берҙәм тотонмағайны әле. 2006 йылда ауыл хакимиәте башлығы вазифаһына тәғәйенләнгәс, ҡатын-ҡыҙҙар, аҡһаҡалдар советтары, ағинәйҙәрҙе, шулай уҡ медицина хеҙмәткәрҙәрен, уҡытыусыларҙы бергә йыйырға булдым. Кәңәш ҡороп, эскелекте бөтөрөү юлдарын барлап, берҙәм эшләргә һүҙ килештек. Мәктәптә сығыштар яһаныҡ, айыҡ туйҙарҙы, дини сараларҙы бергә үткәрә башланыҡ. 2011 йылда "Айыҡ ауыл" конкурсы иғлан ителгәс, бик ҡыуандыҡ, сөнки айыҡлыҡ өсөн көрәште рәсми рәүештә үткәреү мөмкинлеге асылды. Быға тиклем беҙгә бик күп көртәләр аша үтергә тура килә ине, аяҡ салыусылар ҙа осрап торҙо. Шундай мәлдәрҙә, был эш беҙгә генә кәрәкме ни, халыҡтың эсеүе кемгә отошло икән, ни өсөн башҡалар ҙа был эшкә ҡушылмай, тигән уйҙар тынғы бирмәй ине. Ә конкурс айыҡлыҡ хәрәкәтен асыҡ, ирекле рәүештә йәйелдерергә булышлыҡ итте. Ауыл халҡы был конкурсҡа дәррәү ҡушылды. Эскән кешенең айыҡ тормош юлына баҫыуы - беҙҙең өсөн иң ҙур һөҙөмтә. Әлбиттә, эскелекте халыҡ аңынан юйып ташлауы еңел түгел. Насар ғәҙәт халыҡтың дөйөм холҡона әүерелгән бит, күптәр тормошон хәмерһеҙ күҙ алдына ла килтермәй. Шуға күрә ауылдарҙа эскелекте тулыһынса бөтөрөр өсөн йылдар буйы эшләргә, көрәшергә кәрәк. Шуныһы ҡыуаныслы: йәштәр эсмәй. Энтузиастар ғына айыҡлыҡ өсөн көрәшергә тейеш түгел. Был дәүләт кимәлендә башҡарыла торған эш. Мин әлеге көндә хакимиәт башлығы була тороп та кешенең насар ҡылыҡтары өсөн протокол төҙөй алмайым. Ә полиция хеҙмәткәре 15 ауылға берәү генә. Шуға күрә, аңғәмә рәүешендә генә эш алып барырға тура килә. Беҙгә тәрәү, ярҙам булыр, эшебеҙҙе ныҡытыр законлар кәрәк.

**Данил ДӘМИНДАРОВ, Күгәрсен районы Теләүембәт ауыл хакимиәте башлығы:** Эскелеккә ҡаршы сараларҙы был конкурсҡа ҡәҙәр үк үткәрә башлағайныҡ инде. Ауылдарҙа түңәрәк ҡорға йыйылып, һөйләшеүҙәр ойоштороҡ, медицина хеҙмәткәрҙәре менән бергә әңгәмәләр үткәрҙек. Шәжәрә байрамдарынан тыш, һуңғы йылдарҙа һабантуйҙар ҙа беҙҙә спиртлы эсемлектәрһеҙ үтә. Хужалыҡтар, предприятиелар коллективтары байрамдарҙы шулай уҡ тулыһынса айыҡ үткәрә. Ауылыбыҙҙы ғына түгел, тотош районды айыҡ тип атарға була, сөнки беҙҙең районы башлыҡы бөтөн коллективтарҙа тәмәке тартыуҙы, эскене тыйҙы. Шуға күрә район сараларында хәҙер бөтөнләй спиртлы эсемлектәр ҡулланылмай. Яныраҡ ҡына булып үткән район һабантуйында тәмәке лә, һыра ла һатылманы, байрамда бер иҫерек кеше лә булманы. Әлбиттә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтәһен дә айыҡ юлға баҫтырыуы ҡыйын. Әммә халыҡтың йәшәү рәүешен үҙгәртер өсөн һәр яҡтан ярҙам итергә тырышабыҙ.

**Наил ЙОСОПОВ, Салауат районы Мәсетле ауылы хакимиәте башлығы:** Районыбыҙҙың Көсәпәй ауылында иң әүҙем халыҡ йәшәй, тиһәк, артырыу булмаҫ. Эшкә егәрләләр, үҙ көнөн үҙҙәре күрәләр. Ауыл 84 йорттан тора. 35 шәхси хужалыҡтың үҙ тракторы бар. Шуға күрә халыҡ эскелек кеүек насар ғәҙәттәргә ваҡыт әрәм итмәй, был турала уйҙарында ла юҡ. Ике магазин бар ауылда, икеһендә лә спиртлы эсемлектәр бөтөнләй һатылмай, сөнки алыусылары юҡ. Концерттар, йола байрамдары булһынмы, береһендә лә спиртлы эсемлектәр ҡулланылмай. Кәзә ҡымыҙын етештереүсе үҙ фермерыбыҙ бар. Бына шул ҡымыҙ менән үтә байрамдарыбыҙ. Ошо көндәрҙә районда еңел атлетика буйынса кросс үткәрелгәйне. Шунда барлыҡ тәүге урындарҙы тиерлек көсәпәйҙәр яуланы. Был айыҡ, сәләмәт тормош алып барыу һөҙөмтәһе. Башҡа ауылдарҙа ла халыҡты айыҡ юлға баҫтырыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Иң мөһиме - кешенең аңын үҙгәртергә кәрәк.

**Нәсимә ӘЙҮПОВА, Ишембай районы Этҡол ауылы хакимиәтенең эштәр идарасыһы:** Ауылда ниндәй генә сара үткәрһәк тә, иң тәүҙә йәштәрҙе күҙ уңында тотабыҙ. Ауылға килеп инеү менән "Айыҡ ауыл" тигән плакат тора. Этҡолдар ғына түгел, хатта ситтән килеүселәр ошо плакатты күреп, ауылда хәмер ҡулланыуҙан тыйылалар. Элек суррогат эсемлектәр, көмөшкә һатыусылар күп була торғайны. Хәҙер улар ҙа кәмене. Ундай кешеләр менән күберәк ҡатын-ҡыҙҙар советы эшләй. "Көмөшкә ҡоймайым, айыҡ ауылда йәшәйем икәнде беләм" тигән ғаризалар йыйып сыҡтыҡ ауыл буйлап. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хоҡуҡ һаҡлау органдары был эш менән шөғөлләнеп бармай, беҙҙең көсөбөҙ юҡ, тиҙәр. Күп осраҡта аңлатыу эштәре менән сикләнергә тура килә. Әммә былай аңлатыу эштәренең дә көсө ҙур, матур итеп һөйләшһәң дә кеше аңлай. Юҡһа, быға тиклем "Ниңә көмөшкә ҡыуаһың, туҡтат был эшеңде", тип тыйған кеше лә булманы бит. Тыйыусы булмағас, халыҡ эсте лә, көмөшкә лә ҡыуҙы. Бына хәҙер аҡрынлап тыйылалар.

**Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, медицина фәндәре докторы:** Был конкурс айыҡлыҡ хәрәкәтенең башланғысы ғына, тип уйлайым. Уны артабан таҡ ла киңерәк йәйелдерергә кәрәк. Беҙ, депутаттар, хөкүмәт вә-

килдәре, үҙ сиратыбыҙҙа был башланғысты күтәреп алырға тейешбеҙ, әлбиттә. Хуплау, әлбиттә, ошо өлкә буйынса яңы закондар, ҡарарҙар ҡабул итеү рәүешендә булырға тейеш. Сөнки, "Айыҡ ауыл" конкурсы тәжрибәһе күрһәтеүенсә лә, уны тормошҡа ашырыусылар бары тик өгөт-нәсихәт, кешенең аңына тәьсир итә торған, гәм халыҡ алдына ҡыҙарта, оялта торған ниндәйҙер йолалар ярҙамында ғына көрәшә яуызлыҡҡа ҡаршы. Әммә көмөшкә ҡыуыусыларҙы, суррогат эсемлек һатыусыларҙы, ғөмүмән, эскелек кеүек яуызлыҡты тамырынан юҡ итеүгә йүнәлдерелгән ҡаты закондарыбыҙ әлегә юҡ, улар киләсәктә булырға тейеш. Был без, депутаттар, эшләргә тейешбеҙ. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыр өсөн һайланған муниципаль, республика кимәлендәге депутаттар был йәһәттән үҙ эшен бигерәк тә йәнләндерергә тейеш. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгә сарала бер генә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты ла булманы...

**Роберт ДӘҮЛӘТШИН, "Айыҡ Башҡортостан" йәмәғәт хәрәкәте рәйестәше:** Ҡатнашыусыларҙы баһалағанда тәү сиратта айыҡ тормошто пропагандалаған сараларҙың төрләлегенә, һәҙмәтләлегенә һәм алкоголде ҡулланыуҙы тыйыу сараларына иғтибар иттек. Конкурста енеп сығыу өсөн ауыл магазиндарында спиртлы эсемлектәрҙең бөтөнләй һатылмауы йәки һатыуҙың мөмкин тиклем ҡыҫҡартылыуы төп шарттарҙың береһе булып торҙо. Сөнки эскелектең таралыуына ике күренеш төп сәбәпсе бит: алкоголде рекламалау һәм уны бер ҡыйынлыҡһыҙ һатып алыу мөмкинлеге. Конкурс барышында ҡыйынлыҡтар ҙа тыуып торҙо. Күптәр беҙҙе аңламаны. Ҡайһы саҡта ҡатнашыусыларҙың үҙҙәренә был сараның асылын ныҡлап аңлатырға тура килде. Сөнки, беҙ фәлән-фәлән сара үткәрҙек, быныһ өсөн беҙгә ниндәй бүләк буласаҡ, тип мөрәжәғәт итеүселәр ҙә булды хатта. Эш бүләктә лә, аҡсала ла түгел бит. Иң мөһиме, йәштәр эскегә һалышмаһын, хәмерҙән тыйылһын, ә эскәндәре иһә - ташлаһын. Конкурс һәҙмәтләре үткән йылдың декабрь айында уҡ барланырға тейеш ине. Ләкин аҡса һуңлап ҡына бүленеүе арҡаһында ҡатнашыусыларҙы бүләкләүҙе кисектерергә тура килде. Киләсәктә республика етәкселеге айыҡлыҡ хәрәкәтенә нығыраҡ иғтибар бүлһен, тигән теләктәмен. Хәҙер төбәктәр был йәһәттән ҡануниәтҡә үҙҙәре үҙгәрештәр индерә ала. Мәҫәлән, Чечняла алкоголь тәүлегенә ике сәғәт кенә һатыла. Башҡа төбәктәрҙә лә ҡануниәт тарафынан ниндәйҙер саралар күрелә башланы. Башҡортостанда ла бындай ҡарарҙарҙың ҡабул ителеүе айыҡ һәм сәләмәт тормоштоң таралыуына ярҙам ғына итер ине.

**Иҡсан МӨНИРОВ яҙып алды.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ҠОЛЛОҠҠА ЭЛӘККӘН...

## һәм суҡындырылған



**Башҡорт тарихында башҡорт ихтилалдарын баҫтырғандан һуң крепостнойлыҡҡа бирелгән башҡорттар, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәм балаларҙың артабанғы яҙмышы аҙ өйрәнелгән. Әлбиттә, улар суҡындырыла, рус исемдәре ҡушыла. Борис Тарасовтың "Россия крепостная. История народного рабства" китабында һүҙ башҡорт ихтилалынан һуң Санкт-Петербургҡа, XVIII быуаттың билдәле ғалимы һәм шағиры Василий Тредьяковскийға крепостнойлыҡҡа барып эләккән башҡорт ҡатыны хаҡында бара. Бөгөн гәзит уҡыусыларға шул китаптан ирекле тәржемәләге өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

"Сығанаҡтарҙа 1746 йылғы шундай ҡыҙыҡлы бер эш һаҡлана. Ул "Профессор Тредьяковскийҙың гренадер ҡатынын үҙләштереүе тураһында" тип атала.

Хәрби коллегияға адресланған ялыуҙа: "Нева гарнизон полкының гренадеры Мәдем Бетков (башҡорт) шиҡәйәтендә әйтелеүенсә, Санкт-Петербургта ул рекрутлыҡҡа алынғанда тыуған ерендә - Ҡаҙан губернаһында ҡалған ҡатыны Ентлавлета Однокулова (документтарҙа башҡортса исем-фамилиялар шулай боҙоп яҙылған. - **Ред.**) менән осраша. Бетков хеҙмәткә алып килгәндән һуң бер ни тиклем ваҡыт үткәс, уның ҡатыны ниндәйҙер офицерҙар тарафынан Санкт-Петербургҡа алып киленә һәм өс йыл элек Санкт-Петербург Фәндәр академияһының профессоры Тредьяковскийҙың улы Василий Кирилловҡа бүләк ителә. Әле ул шунда йәшәй һәм хеҙмәтсе булып эшләй. Шуға күрә гренадер Бетков ҡатынын кире ҡайтарыуҙы һорай", - тиелә.

Хәрби коллегия Фәндәр академияһының кәнсәләренән, "Бетковтың ҡатыны Ентавлета Тредьяковскийҙа хеҙмәтсеме һәм ул уға ниндәй акттар буйынса хужа?" тигән һорауға яуап талап итә. Быға яуап итеп, Фәндәр академияһы Коллегияға Тредьяковскийҙың үҙ ҡулдары менән яҙған кире ҡағыуын ебәрә: "Башҡорт Мәдем Бетков ялғанлай... Миндә 1742 йылдан алып бер башҡорт ҡатыны йәшәй, уны минең ҡатынома хеҙмәт итергә тип, ҡайным Филип Иванов бирҙе... 1740 йылдан уны беҙ суҡындырып, Наталья Андреева тип атаныҡ... Башҡорт гренадеры уны, Ҡаҙан губернаһынан офицерҙар алып килгән, тип бер аҙ ялғанлай. Эш улай булманы... Сөнки был ҡатын хәрбиҙәр тарафынан Һамар ҡалаһы эргәһендә баш күтәргән башҡорт-бурҙары араһынан ҡулға алына. Башҡорттарҙың күпселеге шунда язалана, ҡатындары һуңынан Һамарға килтерелә һәм минең ҡайныма бирелә. Шулай уҡ башҡа баш күтәреүселәрҙең ҡатындары, ҡыҙҙары һәм улдары, баш күтәреүселәргә яза рәүешендә, указ буйынса таратылып бирелде...

Был ҡатын Башҡортостанда саҡта Мөхәммәт дине буйынса ошо гренадерҙың хәләл ефете тип һаналһа ла, хәҙер инде ул христиан динле һәм уны басурман ҡатыны тип таныу, динһеҙ менән йәрәштереү ҡағиҙәләре бер ҡайҙа ла яҙылмаған. Икенсе яҡтан, беҙҙәге Наталья Андреева ул гренадерҙың ҡатыны булмауы ла мөмкин, сөнки ул быны йәрен ҡотҡарыу өсөн түгел, ә бында башҡорт ҡатыны табыу ауыр булған өсөн эшләйҙер, тигән шик тә бар. Ә минең ҡайным, указ буйынса был ҡатындың законлы хужаһы булғас... уны телгә алынған гренадерға биргеһе килмәй...

Был мәғлүмәтте мин, профессор Василий Тредьяковский, үҙ ҡулдарым менән яҙҙым. 1746 йылдың октябре, 13-сө көн".

Хәрби коллегия Бетковтан хәҙер инде Наталья Андреева тип йөрөтөлгән ҡатын ысынлап та уның ҡатыны икәнлеген раҫлауҙы талап итә. Был талапҡа Бетковтың етәкселәре бергә хеҙмәт иткән арҡаҙаштарының шаһитлығын - "суҡындырылғандан һуң Наталья Андреева тип аталған ҡатын Бетковтың ҡатыны" тигән күрһәтмәләрен килтерә.

1747 йылдың июнендә обер-комендант Игнатьев Хәрби коллегияла, "Тредьяковский беҙҙәге гренадер грек динен ҡабул итһә, уға ҡатынын бирәсәге хаҡында вәғәҙә иткәйне, әммә был ваҡытта Бетков Петр Петров булып йөрөүгә ҡарамаҫтан, Игнатьевтан килгән вәкилгә: "Наталья Андрееваны бирмәйем, ул минең крепостнойым", - тип белдерә", тип хәбәр итә.

Ләкин был тарих бәхетле тамамлана. Хәрби коллегия, Тредьяковскийҙың ҡаршылашыуына ҡарамаҫтан, 1747 йылдың 29 июнендә, гренадер Петровтың ҡатыны Наталья Андрееваны бер һүҙһеҙ иренә ҡайтарып бирергә, тигән ҡарар сығара. Был ҡарарҙы кисекмәҫтән үтәү Фәндәр академияһына йөкмәтелә.

Ниһайәт, 20 августа Фәндәр академияһы Коллегияға, Андреева иренә ҡайтарып бирелде, тип хәбәр итә. Билдәле рус шағиры В. Тредьяковскийҙың ир менән ҡатынды айырыуҙан тартынмай, "суҡындырылған милке"нә йәбешеп ятыуы миҫалынан сығып, башҡа алпауыттарҙың үҙҙәрен нисек тотошон күҙалларға мөмкин.

www.bashforum.net

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

# МЫСЫР МӘМЛҮКТӘРЕ...

## ниндәй телдә һөйләшкән?



**Ғәрәп хәлифәте Көнсығышта үҙенең позицияларын юғалтып, ялланыусыларҙан (төркиҙәрҙән һәм берберҙарҙан) регуляр армия төҙөргә мәжбүр була. Һуңынан был армия ялан "әсирҙәре" менән тулыландырыла. Ғәрәп илдәрендә уларҙы "гүләмдәр" тиҙәр. 865 йылда гвардиясылар власты үҙ ҡулына ала. 10 йыл эсендә улар дүрт хәлифте урынынан бәреп төшөрә.**

"Барлыҡ мосолмандарҙың хәлифе төрки гүләмдәренән башҡа власты бер сәғәт тә тотоп тора, ә тегеләре хәлифтең рөхсәтенән башҡа сит илдә хакимлыҡ итә алмаҫ ине", - тип яҙа Лев Гумилев. Мута-сима хәлифе ярҙамында төрки сығышлы мәмлүк Әхмәт ибн-Тулун Мысырҙа наместник булып китә. 869 йылда ул Сүрия менән Фәләстанды берләштерә, шул уҡ ваҡытта Мутасим ҡолдар һатылған барлыҡ баҙарҙарҙан гүләмдәрҙе һатып алып, дружинаһын нығыта. Фатимидтар ваҡытында Мысыр ғәскәре аҡ һәм ҡара мәмлүктәрҙән тора. Көньяҡ Русия далаларынан булған төрки сығышлылар Нилдың Ар-Руад утрауында берләшә һәм бахриттар тип атала. Тыуған ерҙәренән айырылған мәмлүктәр этник билдәләр буйынса берләшә башлай. 1051 йылда Хакимдың шәхси гвардияһы һәм мәмлүктәр араһында низағ тыуа. Был көрәш 1062 йылға тиклем дауам итә һәм төркиҙәр Судан негрҙарын ҡыйрата. Шул ваҡыттан алып бөтөн власть бахрит-мәмлүктәр ҡулына күсә.

К. Э. Босворт Мысыр мәмлүктәре тарихын өйрәнеп: "X-XIII быуаттарҙа төркиҙәр мосолман илдәренә әләгеп, "намыҫлы ҡырағайҙар" сифатын - ҡыйыулыҡ, тоғролоҡ, сыҙамлылыҡ, ялағайлыҡты яратмауҙарын, ике йөҙлө булмауҙарын һаҡлап ҡалған. Ғәрәптәр төркиҙәргә өҫтөнлөк биргән һәм уларҙың "арыҫлан сифатын" - ғорурлыҡ, азатлыҡ, йорт эштәрен башҡарыуҙан баш тартыу һәм башҡа сифаттарын баһалаған. Көнсығышта мәмлүктәр эпохаһындағы төркиҙәргә шундай баһалама биргәндәр: "Төркиҙәр сит тәнгә килеп инеп үҫкән һәм ыйынға әүерелгән, һуңынан инде бөйөк дәүләттәрҙең батшалары тажын биҙәгән ҡом бөртөгән хәтерләтә".

Мысыр мәмлүктәренең этник составын билдәләгәндә, уны ҡылыҡһырлауҫы төп элементтарҙың береһе - телгә таянырға һәм этномәҙәни үҙенсәлекте (йылҡы итен ашау, ҡымыҙ, айран, буҙа эсеү) иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Мысыр мәмлүктәренең аралашыу теле булып көнбайыш-ҡыпсаҡ теле тора. Был тарихи дәлилдәр менән дә раҫлана. Күп ғалимдар мәмлүктәрҙең телен ҡумыҡ-ҡарасәй-балҡар теленең диалекты тип иҫәпләй. А.А. Зайончковский ҡумыҡ һәм ғәрәп-ҡыпсаҡ һүҙлектәре араһында параллель үткәрә. Мәхмүт Ҡашғариҙың "Дивану лөғәт ит-төрки" хеҙмәтен мәмлүк-ғәрәп теленең тәүге һүҙлеге тиергә лә мөмкин.

Мысыр мәмлүктәренең телен шулай уҡ хәҙерге ҡараим, ҡарасәй-балҡар, ҡумыҡ, Ҡырым татарҙары теле менән бер төркөмгә индерәләр. Шулай итеп, шуныһы асыҡ: Мысыр мәмлүктәренең теле ҡумыҡтар, ҡарасәй-балҡар, ноғайҙар, ҡырым татарҙары, ҡаҙаҡтар, татарҙар, башҡорттар һәм ҡырғыҙҙар һөйләшкән ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡарай.

***"Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәресен алып барасаҡ уҡытыусы мотлаҡ ерле халыҡ педагогикаһы нигеҙҙәре менән таныш булырға тейеш. Шунһыҙ, дөйөм, декларатив нәсихәттәрҙән бала бер ни ҙә ҡабул итә алмаясаҡ.***

# ЯҠШЫЛЫҠТЫ өйрәтә торған булһын

**Мәғариф өлкәһендә тағы бер яңылыҡ: киләһе уҡыу йылынан башлап РФ Хөкүмәтенең 2012 йылдың 28 ғинуарында раҫланған бойороғо нигеҙендә илдәге бөтә дөйөм белем биреү мәктәптәренең 4-се класс уҡыусылары өсөн "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" тип аталған яңы дәрес уҡытыла башлаясаҡ. Ошоға бәйле йәмәғәтселектә, ата-әсәләр, хатта уҡытыусылар араһында ла төрлө фекер ҡаршылыҡтары килеп тыуҙы. Күптәр мәсьәләнең аңын-тоңон төшөнмәйенсә, был дәресте индереүгә ҡаршы килһә, кемдер юғарынан ни ҡушылһа, шуны үтәргә әҙерлеген белдереп, яңылыҡты тыныс ҡына ҡабул итте. Ә шулай ҙа мәсьәләнең айышы ниҙә һуң? Яңы дәрестең төп маҡсаты ниндәй идеяға бәйле? Һуңғы йылдарҙа мәктәптәр былай ҙа туҡтауһыҙ тәжрибәләр үткәреүҙән тетрәнеп бөткән, уҡытыусылар һәм балалар өсөн был яңылыҡ тағы ла ниндәйҙер көсөргәнеш тыуҙырмаҫмы? Ошо һәм башҡа шундай һорауҙарға аңлатма биреүҙәрен һорап, редакцияға яҙыусы, педагог, "Тормош һабаҡтары"дәреслеге авторҙарының береһе Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы БУРАҠАЕВА менән БР Мәғарифты үҫтереү институты доценты, педагогия фәндәре кандидаты Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы НАФИҠОВАны саҡырҙыҡ.**

**Ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм йәмәғәтселек яңы дәрес индереүгә ҡағылышлы тулҡынланыу һәм борсолоу кисерә. Редакцияға бик күп кеше шылтыратып, ошо мәсьәләне төшөндөрөп биреүҙе үтенә. Ата-әсәләрҙең ҡайһылары, яңы дәрес былай ҙа көсөргәнешле уҡыу программаһын тағы ла ҡатмарландырып ебәрмәҫме, тип борсола. Ошо йәһәттән белгестәр фекерен ишетке килә.**

**З.НАФИҠОВА.** Яңы предметты уҡытыу өсөн бөтәһе 34 сәғәт бүленә, йәғни уҡыу йылы эсендә аҙнаһына 1 сәғәт уҡытыу ҡарала. РФ Мәғариф һәм фән министрлығының ошо туралағы ҡарары нигеҙендә федераль базис уҡыу планына 2012-2013 һәм 2013-2014 йылдарҙа был предметты уҡытыу өсөн үҙгәрештәр индерелә. Ул предметты уҡытыу милли-төбәк йәки мәктәп компонентына ингән предметтарҙың һанын ҡыҫҡартыу аша үткәреләсәк. Ә инде бөгөн яңы стандарт менән уҡыған 1-се класс балалары 4-се класҡа барғас, улар яңы стандартта ҡабул ителгән бизнес уҡыу планы буйынса уҡыясаҡ, сөнки был планға яңы предмет алдан уҡ индерелгән."Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре " предметы алты модулдән (йүнәлештән )тора:

1. Православие мәҙәниәте нигеҙҙәре
2. Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре
3. Буддизм мәҙәниәте нигеҙҙәре
4. Йәһүд мәҙәниәте нигеҙҙәре
5. Дини мәҙәниәттәр нигеҙҙәре
6. Донъяуи этика нигеҙҙәре.

Ата-әсәләр үҙ теләге буйынса ошо йүнәлештәрҙең береһен һайлап алырға тейеш. Һайлау күрһәткесе булып ғаиләнең ниндәй традицияларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә өҫтөнлөк биреүе, тормошҡа булған философик ҡарашы, үҙ тамырҙарының тарихын нисек күҙаллауы тора. Был дәресте индереү беҙҙең өсөн яңылыҡ түгел, ул тәжрибә рәүешендә ҡайһы бер төбәктәрҙә ошоғаса уҡытылып килде, һәм ул ошо мәктәптәр тарафынан яҡлау тапты. Башҡортостанда уҡытыусылар һәм ата-әсәләр нигеҙҙә дүрт йүнәлешкә өҫтөнлөк бирҙе. Күпселек мәктәптәр "Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәресен һайланы. Ҡайһы берәүҙәрҙән, ысынлап та, дин дәрестәре уҡыта башлайҙар икән, рус булмаған балаларға ни өсөн православие нигеҙҙәре көсләп тағыласаҡ, тигән ризаһыҙлыҡтар ишетергә тура килә. Ләкин улар төптә яңылыша. Беренсенән, ниндәйҙер бер дин мәҙәниәте нигеҙен өйрәнеүҙе һайлаған хәлдә лә, улар ошо динде тотоу тәртиптәренә, уның атрибуттарын үтәүгә өйрәтелмәйәсәк, ә 4-се класс балаһы аңлай алырлыҡ дәрәжәлә нимәнең яҡшы һәм нимәнең насар булыуы, йәғни дини мәҙәниәт күҙлегенән әхлаҡ ҡиммәттәре, этнопедагогика нигеҙҙәре хаҡында төшөнсә биреү күҙҙә тотола. Һәр хәлдә, аҙнаһына бер тапҡыр балаларға яҡшылыҡты яманлыҡтан айырырға өйрәтеү насар булмаҫ, тием.

**М.БУРАҠАЕВА.** "Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәреслеген миңә тәржемә итергә тура килде. Башҡаларын да ҡарап сыҡтым, дин тәғлимәттәре улай бик бала башын ҡатырырҙай тәфсирләп түгел, киреһенсә, лозунг һымағыраҡ бәйән итеп бирелгән. Был декларатив нәсихәттәрҙе, лозунгыларҙы балалар ҡабул итеп тә бөтмәйәсәк инде ул, сөнки дәреслектә бәйән ителгәндәрҙең нигеҙе юҡ. Мәҫәлән, беҙ бына "Тормош һабаҡтары"н әҙерләгәндә һәр фекерҙе, төшөнсәне аңлатыу өсөн үҙебеҙҙең "Урал батыр" эпосынан миҫалдар, өҙөктәр алдыҡ, мәҡәлдәр, әйтемдәрҙе файҙаландыҡ. "Урал батыр"ҙа бит тормошобоҙҙоң бөтә һорауҙарына ла яуап табырға мөмкин. Аңлап уҡыған һәм уны өйрәнгән кешегә аҡыллы ишаралар бик күп эпосыбыҙҙа. Ә был яңы дәреслектәрҙең "бағанаһын" нығытып ҡуя торған миҫалдар юҡ. Балалар уҡыясаҡ, тыңлаясаҡ та, онотасаҡ, тигән һымағыраҡ, тойғо ҡалдыра ул.



**Ҡайһы берәүҙәрҙән, ысынлап та, дин дәрестәре уҡыта башлайҙар икән, рус булмаған балаларға ни өсөн православие нигеҙҙәре көсләп тағыласаҡ, тигән ризаһыҙлыҡтар ишетергә тура килә. Ләкин улар төптә яңылыша. Беренсенән, ниндәйҙер бер дин мәҙәниәте нигеҙен өйрәнеүҙе һайлаған хәлдә лә, улар ошо динде тотоу тәртиптәренә, уның атрибуттарын үтәүгә өйрәтелмәйәсәк, ә 4-се класс балаһы аңлай алырлыҡ дәрәжәлә нимәнең яҡшы һәм нимәнең насар булыуы, йәғни дини мәҙәниәт күҙлегенән әхлаҡ ҡиммәттәре, этнопедагогика нигеҙҙәре хаҡында төшөнсә биреү күҙҙә тотола.**

**З.НАФИҠОВА.** Ана шуға ла һеҙҙең "Тормош һабаҡтары" дәрестәре мәктәптәрҙә үҙ урынында ҡалырға тейеш, тип уйлайым, сөнки яңы предметтарҙы тап һеҙҙең дәреслектәр нигеҙләнгән халыҡ педагогикаһына таянып алып барыу дөрөҫ буласаҡ.

**М.БУРАҠАЕВА.** Әлбиттә, "Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәресен алып барасаҡ уҡытыусы мотлаҡ ерле халыҡ педагогикаһы нигеҙҙәре менән таныш булырға тейеш. Шунһыҙ, дөйөм, декларатив нәсихәттәрҙән бала бер ни ҙә ҡабул итә алмаясаҡ. Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәрен уҡытыу шулай уҡ аныҡ миҫалдар менән нығытылырға тейеш. Ошоға бәйле мине аптырауға ҡалдырған шундай бер факт тураһында әйтмәй булдыра алмайым. Әле һүҙ барған ошо дәреслектә "Исламдың әхлаҡи ҡиммәттәре" тематикаһы буйынса Муса Йәлил, Ғабдулла Туҡай тураһында мәғлүмәттәр килтерелә. Беренсенән, М.Йәлилде мосолман тип алғандар, ә ул бит коммунист булған. Башҡорт балалары хәҙер ислам мәҙәниәте нигеҙҙәрен өйрәнәм тип, Муса Йәлил, Ғабдулла Туҡайҙы уҡып ултырырға тейешме ни? Беҙҙең үҙ халҡыбыҙҙың ислам мәҙәниәтендә өйрәнә торған Зәйнулла Рәсүлев, Ғабдулла Сәиди, Мөжәүир хәҙрәт, Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдин кеүек күренекле шәхестәре күп тә баһа!

**Был дәресте үҙләштереүҙә күп нәмәнең уҡытыусыға бәйле булыуын да оноторға ярамайҙыр. Әммә ундай әҙерлекле уҡытыусыларҙы ҡайҙан алырға һуң?**

**З.НАФИҠОВА.** Бөгөнгө көндә һәр йүнәлеш буйынса программалар, дәреслектәр, ата-әсәләр өсөн китап, уҡытыусы өсөн методик ҡулланмалар нәшер ителгән. Рәсәй кимәлендәге һәр бер нәшриәт был предмет буйынса стандартҡа ярашлы итеп үҙенең дәреслеген төҙөгән ("Просвещение","Дрофа","Вентана-графа","Русское слово" һ.б.). Закон буйынса уҡытыусы улар араһынан үҙе теләгән кәрәкле дәреслекте һайлап алыу хоҡуғына эйә. Шул уҡ ваҡытта һәр уҡытыусы был предмет уҡытылған милли төбәк материалдарына таянып, үҙе лә индивидуаль программа төҙөргә тейеш. Республикабыҙ мәктәптәренән Мәғарифты үҫтереү институтына белемен камиллаштырырға килгән уҡытыусыларға беҙ лекция һайын ҡабатлайбыҙ: үҙе йәшәгән ер, урындағы халыҡ тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен белмәйенсә тороп, уҡыусы бала нисек итеп донъяуи кимәлдәге мәҙәниәтте үҙләштерергә тейеш? Шуға күрә әйтәбеҙ: ҡала, ауыл һайын мәсеттәр бар, алып барығыҙ экскурсияға балаларҙы, таныштырығыҙ, һөйләгеҙ, аңлатығыҙ, мәсеттең тышҡы күренешенә, архитектураһына ла иғтибар итһен балалар.

**М.БУРАҠАЕВА.** Әлбиттә, бөтөн нәмә уҡытыусыға бәйле. Ул дәресте 4-се класс балаһы аңына барып етерлек итеп аңлата белергә лә кәрәк бит. Был инде уҡытыусының кимәленә, белеменә генә түгел, уның һөнәри оҫталығына ла бәйле. Мәҫәлән, иғтибар итегеҙ: "Ҡиәмәт көнө" ("Судный день") темаһы ниндәй ҡотолғоһоҙлоҡ тонында ҡурҡыныс итеп бирелә: "... Диңгеҙ ярҙарынан сығып, ер йөҙөн һыу баҫасаҡ, һәм бөтә кеше һәләк буласаҡ..." Был бит кескәй бала йөрәгенә ниндәйен дә ҡурҡыу, хәүеф һаласаҡ! Тимәк, бала был һүҙҙәрҙе ишетергә алдан әҙер булырға тейеш.

**Сәғәттәр һаны бик аҙ, тинек. Тимәк, уҡытыусы иңенә бик ауыр бурыс һалына: был дәрестән бала күңеленә ниндәйҙер аҡыл, белем инеп урынлашһын өсөн уҡытыусыға үҙ программаһын бик ентекләп төҙөргә, ислам ҡағиҙәләре менән халҡыбыҙ, милләтебеҙ менталитетына тап килгән ҡағиҙәләрҙе яраштырырға тура киләсәк, шулаймы?**

**З.НАФИҠОВА.** Тап шулай. Программалар ерле халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадына, халыҡ педагогикаһы нигеҙҙәренә таянып яҙылырға һәм предмет шул йүнәлештә алып барылырға тейеш. Совет заманында үҫкән быуын хәтерләйҙер: оләсәйҙәребеҙ беҙгә халыҡ аҡылын һәм әҙәп өлгөләрен туплаған ниндәй матур нәсихәттәр биргән! Улар мәңгелеккә беҙҙең күңелгә һеңеп ҡалған. Мәҫәлән, оләсәй, ашағандан һуң өҫтәлдә ҡалған ризыҡты, һауыт-һабаны "бисмилла" әйтеп, таҙа таҫтамал менән ябып ҡуй, юғиһә, шайтан унда ҡойроғон тығып болғар, аҙаҡ ул аш-һыу менән эсеңә инеп китер. Йоҡонан торғас та урын-ереңде йыйыштыра һал, юғиһә, унда шайтан аунап ятыр, тип өйрәтер ине. Ошондай һәм башҡа шундай әҙәп, тәртип нормаларына өйрәтеүсе һабаҡтар ине улар.

**Ябай ғына итеп әйткәндә, был дәрестәр балаларҙы яҡшыны - ямандан, аҡты - ҡаранан, изгелекте яуызлыҡтан айыра белергә өйрәтергә, үҙенә күрә бер "оләсәй мәктәбе"нә әүерелергә тейештер, күрәһең…**

**З.НАФИҠОВА.** Эйе. Шул уҡ ваҡытта предметтың йөкмәткеһен балаларға дини мәҙәниәт күренеше тип еткереү, аңлатыу мотлаҡ иҫәпләнә, сөнки һәр кеше үҙ ғүмеренең ниндәйҙер осоронда "Мин кем ул?", "Ҡайҙан килдем?", "Донъяла ни өсөн йәшәйем?", "Яҡты донъя менән хушлашҡас, минең менән нимә буласаҡ?" тигән һорауҙарға яуап эҙләй. Һәр бер дин уға үҙенсә яуап бирә. Быны балаларға дини тәғлимәттәрҙә аңлатылған рәүештә, төрлө дини әҙәбиәт нигеҙендә, халыҡтың ауыҙ-тел ижады өлгөһөндә, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә төшөндөрөү кәрәк. Дини изге китаптар - ул халыҡтың әҙәби мираҫы, ә дини йорттар - архитектура өлгөләре, тәреләр - һынлы сәнғәт ҡомартҡыһы, тип аңлатыу дөрөҫөрәк булыр.

**М.БУРАҠАЕВА.** Мин дә шул ҡараш яҡлымын, сөнки бала белергә тейеш: нимә ул синагога, нимә ул сиркәү, мәсет... Артабан ҡыҙыҡһынып китеп, күберәк белергә итһә, улар тураһ-

***✓ Бөтә йүнәлештәр буйынса сығарылған программалар һәм дәреслектәрҙең йөкмәткеһе өс төрлө донъяуи ҡиммәттәрҙе төшөндөрөүгә бәйле: нимә ул тыуған ил, ғаилә, мәҙәни ғөрөф-ғәҙәт, йола.***

# ЯМАНЛЫҠТАН АЙЫРЫРҒА... был дәрес

ындағы мәғлүмәтте үҙаллы ла өйрәнә алыр.

**З.НАФИҠОВА.** Бала дәрестә үҙе өйрәнә, белмәгәнен өйҙә ата-әсәһенән һораша, шуның өсөн беҙ был сылбырҙы үҙ ағышына ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Тәрбиә, йүнәлеш биреү уҡытыусы аша барырға тейеш. Бала аша беҙ уларҙың ата-әсәләренә барып етергә, уларҙың күңел ишеген шаҡырға тейешбеҙ, сөнки бөгөн ата-әсәләр ҙә икенсе бит. Ә баланың кеше, шәхес булып үҫеүендә тап ата-әсә яуаплы, балаға уларҙың йоғонтоһо көслө. Мәҫәлән, уҡыусыларға шундай өйгә эш бирелә: улар үҙҙәренең исемдәре, фамилиялары нимә аңлатыуын һүҙлектән эҙләп табырға, уларҙың нимә аңлатыуын асыҡларға; шәжәрәләрен төҙөргә тейеш. Ә бит класта төрлө исем-атлы төрлө милләт балалары уҡый. Башҡорт йә татар балаларына йәһүд йәки православие мәҙәниәте нигеҙҙәрен көсләп уҡытып булмай бит инде. Был бала хоҡуҡтарын боҙоуға килтерә. Шуға күрә лә уларҙы бүлеп уҡытырға тура киләсәк. Өйгә эш биргәндә һәр кемгә үҙ ғаиләһендә урынлашҡан йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе дәрескә килеп һөйләү бурысы ҡуйыла. Тәбиғи, бала ата-әсәһенән һорашып, үҙе аңлай алырлыҡ кимәлдәге белемде төшөнә башлаясаҡ.

**М.БУРАҠАЕВА.** "Тормош һабаҡтары" дәреслегендә бөтә был тәрбиә алымдары матур итеп бирелгән. Исем-фамилиялар тигәс, иҫкә төштө. Балаларға өйгә эш рәүешендә ҡыҙ һәм малай исемдәре яҙып килергә ҡушһаң, кластарындағы исемдәрҙе теҙеп сығалар ине: Эльвина, Кристина, Эдик, Аэлита... Исемдәр һәм никахтар буталған кеүек, традициялар ҙа бик нык буталды хәҙер. Дәрес биреүсе уҡытыусылар бына ошо буталсыҡтар араһында аптырап ҡалырлыҡ булмаһын ине. Мәҫәлән, ниндәйҙер делегация йәки ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы, ғәҙәттә, икмәк-тоҙ менән ҡаршылау йолаһы бар. Юлдан килеп төшкән ҡунаҡтар әле йыуып өлгөрмәгән ҡулдары менән икмәкте матҡып өҙөп алып ҡабырға мәжбүр булалар. Был күренештең һис кенә лә беҙҙең халыҡтың ғөрөф-ғәҙәте менән уртаҡлығы юҡ. Башҡорт бер ваҡытта ла бысраҡ ҡулдары менән икмәккә йоғонмаған, аяғөҫтө икмәк ашап тормаған. Ошондай нәмәләрҙе белергә кәрәк, ул һис тә ваҡ-төйәк түгел.

**▶ Хәҙер ата-әсәләр бөтөнләй икенсе, тип әйтеп киткәйнегеҙ. Дөрөҫ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе белгән, урта быуын вәкилдәрен тыҡлып, өйрәтеп үҫтергән оло быуын кешеләре - аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр менән аралар өҙөлә бара, сөнки уларҙың ейән-ейәнсәрҙәре генә түгел, бүлә-бүләсәләре хәҙер ғаиләләр ҡороп, ата-әсәләр булып, балалар үҫтерә. Уларға нәсихәт бирерҙәй быуын үҙе совет осоро "аллаһыҙҙары" мөһөрө менән, тормош һабаҡтарын белмәйенсә үҫкән кешеләр. Ошондай шарттарҙа яңы дәресте алып барасаҡ уҡытыусылар (әйткәндәй, уларҙың да күбеһе - йәш быуын вәкилдәре) нимәгә таянып эшләргә, ҡайҙан материалдар табырға тейеш һуң?**

**М.БУРАҠАЕВА:** Уҡытыусылар менән йыш осрашырға, һөйләшергә тура килә. Белемдәрен камиллаштырыу махсус курстарға килеүселәр менән дә әңгәмәләшәм, һораһалар, лекциялар ҙа уҡыйым. Бына шунда беленә лә инде уларҙың тарих, тел, мәҙәниәт өлкәһендәге белем кимәле. Ысынында, күп уҡытыусылар үҙ өҫтөндә эшләмәй. Яңыраҡ шундай осрашыуҙарҙың береһендә туған телдә уҡытыуҙың әһәмиәте тураһында һөйләгәндән һуң, берәү минә: "Ниңә был турала күберәк яҙмайһығыҙ, йышыраҡ һөйләмәйһегеҙ?" - тигән реплика белдереп, үҙенең был өлкәлә тулыһынса тип әйтерлек хәбәрҙарһыҙлығын белдерҙе. Һуң күпме яҙырға, һөйләргә була инде?! 20 йыл хәҙер шул турала һөйләйем, яҙам, китаптар сығарам. Ун йыл буйы сығып килгән "Киске Өфө" гәзите был хаҡтағы минең материалдарымды ла, башҡа телһөйәр, илһөйәр шәхестәрҙең сығыштарын да даими баҫтыра. "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәрендә лә баҫыла сығыштарым. Әҙерәк ҡыҙыҡһынырға, ҡулға гәзит-журнал алып, ҡараштырып торорға кәрәктер бит инде уҡытыусымын тигән уҡытыусыға. Ысынлап та, һеҙ әйткәнсә, тәрбиә ебе өҙөлөп ҡалды бер ара. Мәктәптәр фәҡәт өлгәшкә генә иғтибар итә, ә тәрбиә мәсьәләһе артта тороп ҡалды. Уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләрендә беренсе урынға "Нисә процент бала вузға уҡырға ингән?" тигән һорау сыға, мәғариф эше шуның буйынса ғына баһалана. Ә инде юғары белемле йәштәрҙең нисәүһе тәртип боҙған, күпмеһе эсә, тарта, наркотик ҡуллана - уларына иҫәп тә, һан да юҡ.

**З.НАФИҠОВА:** Яңы дәрестең төп маҡсаты - баланы әхлаҡи нормаларҙың асылына төшөндөрөү, уларҙы аңлы рәүештә үтәргә, үҙ-үҙен тирә-йүндә тота белергә, кеше менән аралашырға, төрлө мәҙәниәт шарттарында яҡшыны ямандан һәм насарҙан айыра белергә өйрәтеү. Төрлө диндәр мәҙәниәте нигеҙендә донъяуи кимәлдә ҡабул ителгән әхлаҡи ҡиммәттәрҙе таный белергә һәм уларҙы үтәргә өндәү шулай уҡ мөһим бурыс. Был предмет башланғыс мәктәп өсөн ҡабул ителгән яңы быуын федераль дөйөм белем биреү стандарты нигеҙендә индерелә. Стандарттың төп талабы - төрлө яҡлап үҫешкән, заман талаптарына ҡалыплашҡан, белемле, фәнни яҡтан үҙләштергән белемен ғәмәли йәһәттән көндәлек йәшәйештә ҡуллана белгән, иленә, халҡына тоғро булып ҡалған, үҙ ғаиләһен ҡайғыртҡан, хәстәрлекле, сәләмәт йәшәү ҡанундарын үҙ иткән иманлы шәхес тәрбиәләү. Шуға күрә лә бөгөн мәктәптә тәрбиәүи эшкә ҙур иғтибар бирелергә тейеш. Әлбиттә, был бурыс уҡытыусы иңенә генә йөкмәтелмәй, ә ата-әсәләр менән берлектә алып барылырға тейеш. Яңы предметҡа бүленгән 34 сәғәттән 4 дәресте ата-әсәләр ҡатнашлығында алып барыу ҡаралған. Мәктәптә яңы дәресте уҡытыу өсөн дин әһелдәре йәлеп ителмәй, сөнки, билдәле булыуынса, дин дәүләттән айырылған һәм дәүләт ҡарамағындағы мәктәптәрҙә улар дин тәғлимәттәрен өйрәтеү хоҡуғына эйә түгелдәр. Шуға ла "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" дәрестәрен фәҡәт профессиональ белеме булған, мәктәптә башҡа дәрестәргә лә ингән уҡытыусылар алып барасаҡ. Әйткәндәй, БР Мәғарифты үҫтереү институтынан минең менән бергә биш кеше Мәскәүҙә уҡып ҡайттыҡ. Үҙебеҙҙә иһә был дәрестәрҙе уҡытыу өсөн 3 900 белгес әҙерләнә. Бөтә йүнәлештәр буйынса сығарылған программалар һәм дәреслектәрҙең йөкмәткеһе өс төрлө донъяуи ҡиммәттәрҙе төшөндөрөүгә бәйле: нимә ул тыуған ил, ғаилә, мәҙәни ғөрөф-ғәҙәт, йола. Уҡытыусы һәм ата-әсәләр ошо рухи ҡиммәттәрҙең асылын ябай ғына кимәлдә, бала уйланырлыҡ, унда яҡшыға ынтылыу теләге уянырлыҡ итеп аңлатырға тейеш. Материал етерлек. Әле генә әйтеп үттек: халыҡ педагогикаһы ҡиммәттәрен, ауыҙ-тел ижады хазиналарын файҙаланырға кәрәк. Уҡытыусыға ярҙам йөҙөнән электрон дискылар эшләнгән. Уларҙа дәрестә ҡулланыу өсөн өҫтәмә материалдар етерлек.

**▶ Совет осоронда йәшәгән быуындар ҡанаты ҡайырылған ҡошто хәтерләтә, сөнки ул йылдарҙа халыҡтың милли рухы менән дини рухы айырылғайны. Был ике ҙур донъяны айырып ҡарау дөрөҫ түгеллеген ваҡыт иҫбат итте инде. Халҡыбыҙҙың мәшһүр улдары Әхмәтзәки Вәлиди менән Шәйехзада Бабич, мәҫәлән, намаҙ уҡыған, дин тотҡан, шул уҡ ваҡытта милләтебеҙҙе лә ҡайғыртҡан. Балаларҙы ана шундай илһөйәрҙәр өлгөһөндә тәрбиәләү кәрәк. Милли рух менән дин нигеҙҙәре һабаҡтарын бергә яраштырғанда, ул бик ҡеүәтле көстө тәшкил итәсәк. Яңы дәресте уҡытыу процесында һеҙ быны нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**М.БУРАҠАЕВА:** Яңы предмет беҙгә балаларыбыҙҙы үҙ халҡына, еренә, иманына тоғро шәхестәр итеп тәрбиәләү өсөн бик ҙур мөмкинлектәр бирә, тик шунан файҙалана белеү өсөн әлеге лә баяғы ижади фекерләгән, белемле, донъяға киң ҡарашлы уҡытыусылар кәрәк. Дөйөм йүнәлеш шундай булырға тейеш, тип уйлайым мин: яңы дәрестәрҙе уҡытыу нигеҙенә иң тәүҙә башҡортлоҡ, милли рух һалынырға тейеш. "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәрестәрендә "Урал батыр" эпосын нигеҙ итеп алырға, уның тураһында һүҙ сығарырға кәрәк, сөнки, ҡабатлайым: эпосыбыҙ беҙҙең иҫ китмәле, унда йәшәйеш, әхлаҡи, тәрбиә ҡанундары һалынған, бөтөн донъяуи һорауҙарға яуап, ишара табырға була. Уның һәр һөйләмендә бер мәғәнә ята. Башҡорт милләте диндән алда барлыҡҡа килгән һәм йола, ғәҙәттәре лә дингә тиклем уҡ нығынған булған. Ә бит диндән һуң барлыҡҡа килгән милләттәр ҙә бар. Халҡыбыҙҙың диндән алда уҡ һалынған йәшәү йолалары булғас, дингә ҡарата мөкиббәнлек тә юҡ. Мәктәптәрҙең күпселеге "Донъяуи этика нигеҙҙәре"н һайлаған. Уҡытыусылар менән осрашыуҙа бының сәбәбен һорағас, "Был дәрестә дин юҡ", тип аңлаттылар. Барыбер ҙә диндә бик ҡабул итә һалып бармай уҡытыусылар һәм ата-әсәләр. Ә 4-се класс балалары уны нисек уҡырға тейеш шулай булғас? "Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәреслектәре башлыса урыҫ мәҙәниәте нигеҙендә төҙөлгән, шуға күрә лә үҙебеҙҙең мөхиттә был дәресте халыҡ педагогикаһы аҡылына таянып, "Урал батыр" эпосы нигеҙендә уҡытыу яҡлымын.



**З.НАФИҠОВА:** Этика һәм дин нигеҙҙәрен яраштырып алып барыу, ниндәйҙер урталыҡты табыу кәрәк буласаҡ. Этика нигеҙҙәре кеүек үк, динде яҡшылыҡ, изгелек сифаттары тәрбиәләү сығанағы булараҡ өйрәнеүҙең, төрлө халыҡтар диндәре тураһында ябай ғына итеп төшөнсә биреүҙең бер зыяны ла юҡ. Киреһенсә, дини мәҙәниәт нигеҙҙәрен дөйөм кешелек ҡиммәттәре менән бәйләп алып барыу бик отошло алым буласаҡ.

***Дөйөм йүнәлеш шундай булырға тейеш, тип уйлайым мин: яңы дәрестәрҙе уҡытыу нигеҙенә иң тәүҙә башҡортлоҡ, милли рух һалынырға тейеш. "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Донъяуи этика нигеҙҙәре" дәрестәрендә "Урал батыр" эпосын нигеҙ итеп алырға, уның тураһында һүҙ сығарырға кәрәк, сөнки, ҡабатлайым: эпосыбыҙ беҙҙең иҫ китмәле, унда йәшәйеш, әхлаҡи, тәрбиә ҡанундары һалынған, бөтөн донъяуи һорауҙарға яуап, ишара табырға була. Уның һәр һөйләмендә бер мәғәнә ята. Шуға күрә лә үҙебеҙҙең мөхиттә был дәресте халыҡ педагогикаһы аҡылына таянып, "Урал батыр" эпосы нигеҙендә уҡытыу яҡлымын.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" дәрестәре уҡытыусыларға әҙер ҡалыптарҙан ижади эш лабораторияһына күсеп эшләү мөмкинлеге бирәсәк, һөнәри оҫталыҡты камиллаштырыу һәм донъяға киңерәк йөҙ тотоуға булышлыҡ итәсәк, тигән һығымта яһап була торғандыр. Һәр хәлдә, беҙ шулайыраҡ фекер йөрөтәбеҙ. Әммә уҡытыусы нисегерәк тормошҡа ашырыр бит уны, ваҡыт күрһәтер.**

**Әйткәндәй, яңы фәндә уҡытыусылар беҙҙең "Киске Өфө" биттәренән һәр саҡ үҙҙәренә кәрәкле материалдарҙы таба аласаҡ. Сентябрҙән иһә "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторҙарының береһе, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның яңы "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре " дәресе буйынса методик ҡулланмаларын баҫтыра башлаясаҡбыҙ.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл, вафатына 35 йыл тулды. 35 йылда ғына түгел, 35 көндә онотолған кешеләр була. Ә Рәми Ғариповтың 35 йыл эсендә әле тере сағында күреп етелмәгән, бик күптәр күреп тә, бәгерһеҙ хакимдар күрергә теләмәгән аҫыл сифаттары тулыраҡ асыла барҙы. Бөйөк шағирыбыҙҙың йөрәген шартлатып килгән үлеменән һуң уның үлемһеҙлеге башланды. Тере сағында баҫыла алмаған күпме әҫәрҙәре уҡыусыларға барып етте, шағирҙың ҡыйыулығын, зирәклеген яңы быуындар алдында нығыраҡ раҫланы.**

# ҮЛЕМЕНӘН ҺУҢ...

## үлемһеҙлеге башланды



Рәми Ғариповтың яҙмышы уның яҙмышы ғына түгел. Шағирҙың яҙмышы - халҡыбыҙҙың яҙмышы, уның шатлыҡтары, һыҙланыуҙары халҡыбыҙҙың шатланыуҙары, милләтебеҙҙең һыҙланыуҙары ла ул. Беҙ Рәми Ғариповты йылдан-йыл нығыраҡ аңлай барабыҙ икән, тимәк, үҙебеҙҙең рухи байлығыбыҙҙы, үҙебеҙҙең милли бәҫебеҙҙе нығыраҡ ҡәҙерләргә өйрәнәбеҙ. Ҡуйынында иркәләгән, һөйөп үҫтергән балаһының кем булып китерен әсә алдан белһә икән дә бит! Башҡорт халҡы Рәмиенең кем икәнен шағир тере саҡта уҡ аңлағайны. Ләкин шағир менән уның тыуған халҡы араһына, йәғни гәзиз әсә менән уның гәзиз улы араһына күпме кәртәләр ҡоролдо, ҡоймалар ҡойолдо, упҡындар уйылды...

Милләтенең киләсәген, туған телен яҡлағаны, башҡорт халҡының үҫеше өсөн уның хаҡлы хоҡуҡтарын раҫларға тырышып көрәшкәне өсөн Рәми Ғариповҡа ниндәй нахаҡ ғәйептәр тағылғанын хәҙерге йөштәр шағирҙың замандаштарынан да тәрәнерәк аңлай ала. Сөнки дөрөҫлөк барыбер өҫкә ҡалҡты, Рәми Ғариповтың ижади мираҫын, яҡты рухи донъяһын бикләгән диуарҙар ҡур тырышлыҡтарҙан һуң барыбер емерелде. Ләкин Рәмиҙең исемен артыҡ йыш ҡабатлайһығыҙ, уны изгеләштерәһегеҙ түгелме, тигән мәғәнәһеҙ һорауҙарҙы биреүсе мөртәттәр һаман да шағирҙарҙы эҙәрләкләү һәм тыйыу замандарының ағыулы шойҡанынан ҡотола алмай аҙаплана, бәғзеләре хатта шул шомло ваҡыттарҙың кире ҡайтыуы тураһында хыяллана, ахыры.

Рәми Ғарипов яҡлаған дөрөҫлөктәрҙең тантана итеүе әле генә башланмаған. Беҙ бөгөн уның ниндәй көс менән, ниндәй юғарылыҡта дауам итеүен күрәбеҙ. Донъяла башҡорт теле яңғырағанда, башҡорттоң ҡулында милли китабы булғанда, Рәми Ғарипов тантанаһы яңы быуындарҙың яҙмышын нурландырасаҡ, ил яҙмышы хаҡында уйландырасаҡ, киләсәгебеҙ өсөн изге эштәргә илһамландырасаҡ. "Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!" тигән сағында уҡ Рәми Ғарипов үҙенең ижади ҡаһарманлығы менән киләсәк ишеген уның өсөн ҡабат бер ҡасан да ябылмаҫлыҡ итеп асҡайны инде. Бында һис бер арттырыу юҡ, һәр һүҙ төптән уйлап әйтелә, баһаларҙың тик тейешлеһе бирелә.

Рәми Ғарипов ижады башҡорт халҡының рухи үҫешендә, туған телебеҙҙе һаҡлауҙа оло ваҡиғаға, ныҡлы таяныстарыбыҙҙың береһенә әйләнде. Ошо хазинаны һаҡлау, шағирҙың яңы быуындар менән бөгөнгө көндәгесә матур бәйләнешен киләсәктә тағы ла йөкмәткелерәк итеп үҫтереү беҙҙең уртаҡ һәм мөҡәддәс бурысыбыҙ. Ошо яуаплылыҡ тураһында онотоға һис кенә лә хаҡыбыҙ юҡ.

Рәми ағай кешеләр менән һәр саҡ йылмайып күрешер ине. Шағир менән аралашҡан күпме кешеләрҙең күңелендә был яҡтылыҡ әле лә һаҡлана булыр. Ләкин һиҙгер замандаштары был йылмайыуҙың әлләә күпме һағыш менән ҡушылғанын, йылмайған саҡта ла шағирҙың эстән һыҙланғанын тоймай ҡалмағандыр. Тормошонда бәхетле мәлдәре лә булды, әммә рәхәтлектән генә йылмайманы Рәми. Кешеләргә нисек кенә булһа ла өмөт өҫтәргә, көс өҫтәргә, иманды нығытырға, башҡаларҙы нисек тә ҡанатландырырға тип йылмайыр ине. Уның барлыҡ ижадынан тормошҡа йәм, күңелгә гәм, рухҡа илһам биреүсе ошо балҡыш бөркөлөп тора.

Бөгөн дә Рәми Ғариповтың яҡты ҡарашы беҙгә төбәлгән. Ул ҡараш хәҙерге ҡатмарлы заманда бер-берегеҙгә таяныс булып, донъя ваҡлыҡтарынан юғары күтәрелеп, әлеге һәм киләсәк булмышыбыҙ өсөн бергә-бергә янып, дәртләнеп, ҡанатланып йәшәгеҙ, ти һымаҡ.

Рәми Ғарипов атаҡлы Әҙәбиәт институтында төүге башҡорт студенты сағында һигеҙенсе быуаттағы япон шағиры Ли Боҙың бер шиғырын тәржемә иткәйне, ундағы ошо дүрт юлды йыш ҡына хәтергә төшөрөр ине:

*Ҡарап торам мин тауҙарға,*
*Тауҙар ҙа ҡарай миңә.*
*Оҙаҡ-оҙаҡ ҡарашабыҙ,*
*Ялҡытмай икән ниңә?*

Ысын матурлыҡ, тәрән аҡыл, ихлас хис бер ваҡытта ла ялҡытмай. Бөйөклөк быуаттар буйына үҙенә арбай. Рәми Ғарипов ижады бына ошондай мөғжизәләрҙең береһе. Шағир халҡына, халҡы шағирына һәр саҡ һоҡланып ҡараясаҡ - ниндәй илаһи бәйләнеш, изге берҙәмлек!

Рәми Ғариповтың вафатына 35 йыл. Ә барыһы ла кисәге һымаҡ ҡына. Ағайҙың бер генә һиҙатын да ваҡыт томаны ҡаплай алмай. Уның тураһында нисәмә тапҡыр яҙыуымдыр, ижад кисәләрендә, төрлө осрашыуҙарҙа, тамашаларҙа күпме ҡабат сығыш яһауымдыр - ул һәр ваҡыт ниндәйҙер яңы яғы менән күҙ алдыма килә һәм шундай саҡтарҙа үҙем дә яңырам. Рәми Ғарипов менән байтаҡ йылдар яҡын фекерҙәштәр булып йәшәгәнемә ҡыуанам, вафатынан һуң ижадын халыҡҡа тулыраҡ еткереүҙә, шиғри һүҙенен, ҡатмарлы яҙмышының серҙәрен асыуҙа байтаҡ хеҙмәттәр тыуҙыра алыуыма ғорурланам.

Рәми Ғарипов ҡырҡ биш йәшендә генә был яҡты донъяларҙан киткәс, уның тоғро шәкерттәре Динис Бүләковтың, Сафуан Әлибайҙың, Тимер Йосоповтың, бигерәк тә ағайҙың ҡатыны Надежда Васильевнаның ҙур тырышлыҡтары менән ижады яңынан балҡып асылғас, дан - шөһрәттәре арткас, шағир хаҡында күп яҙҙылар. Уға арналған шиғырҙар ҙа күҙ бихисап. Хатта власть тарафынан ҡыйырһытылған шағирҙы тере сағында урап үтергә тырышҡан ҡурҡаҡ йәндәр, үҙҙәрен Рәмиҙең дуҫы итеп күрһәтергә тырышып, иҫтәлектәр баҫтырҙы. Ни тиклем ике йөҙлө була белә был донъяның бәндәләре...

Тарихты һылап-һыйпап шымартырға ярамай. Дөрөҫлөктө яратҡан шағир хаҡындағы һүҙ ҙә дөрөҫ булырға тейеш. Бөгөнгө талаш-йыртыш заманында Рәми Ғарипов һымаҡ шәхестәр айырыуса һағындыра. Бөгөн Рәми Ғариповтың үткер һүҙенә, Булат Рафиковтың, Әхиәр Хәкимовтың, Марат Минһажетдиновтың, Әнүр Вахитовтың, Ким Әхмәтйәновтың, Вафа Әхмәҙиевтың принципиаль баһаһына, Миәссәр Басыровтың сая егетлегенә, Рәшит Солтангәрәевтың тапҡыр мәрәкәаша күптәрҙең килешмәгән ҡылыҡтарын фашлауҙарына, Зәйнәп Биишеваның дәрәжәһенә ҡарамайынса, һәр кемгә тураһын әйтер әсе теленә, Мостай Кәримдең аҡыллы кәңәштәренә, Назар Нәжмиҙең талапсан сығыштарына ҡалай мохтажбыҙ беҙ!

Аҙ йәшәһә лә, Рәми күпте күреп, күпте кисереп китте. Шағирҙың тормош ағышындағы хәүефле ваҡиғаларҙы алдан һиҙемләүе, Башҡортостандың яҙмышы хаҡындағы борсолоу-һыҙланыуҙары дөрөҫҡә сыкты. Әйткән һүҙҙәре бөгөн дә ҡәҙерле, бөгөн дә халҡыбыҙҙың теләк -ынтылыштары менән тап килеп, уны фиҙаҡәр эштәргә рухландырып, берҙәмлеккә һәм уяулыҡҡа, ҡыйыулыҡҡа һәм уңғанлыҡҡа саҡырып тора.

Халыҡ хәтерендә йәшәү шағирҙың иң ҙур бәхете. Рәми Ғарипов ил хәтерендә лә, балаларының күңелендә лә йәшәй. Шуға күрә ул айырыуса бәхетле. Улдары Салауат менән Азамат, һөйөклө ҡыҙы Гөлнара аталарының иҫтәлеген тоғро һаҡлай, уның лайыҡлы вариҫтары булып йәшәй.

Булаҫаҡ Башҡортостандың халыҡ шағиры уҡыған, хәҙер уның исемен йөрөткән гимназия алдында 1997 йылдың 1 октябрендә һәйкәл аҫҡанда күңелемдә ошо юлдар тыуғайны:

*Рәми ағай!*
*Ниҙәр кисерәләр, эй, йәнең:*
*Һәйкәлеңә бына сәскә һала*
*Йәлил ейәнең.*

Азаматтың улы Йәлил хәҙер инде егет булып үҫеп етте. Киләсәктә Йәлилдең ейәндәре лә, башҡа вариҫтарының вариҫтары ла Рәми Ғариповтың һәйкәленә сәскә һалыр. Пушкин әйтмешләй, "Үлән баҫмаҫ халыҡ һуҡмағын".

Бер заман Ҡаҙандың Бауман урамында йөрөгәндә ниндәйҙер хәл килеп сыҡҡас, Мостай Кәрим: "Был ваҡытта Ғабдулла Туҡай нишләр ине икән?" - тип һорап ҡуйғайны. Туҡай йәшәгәнде өс тапҡыр йәшәгән аҡыл эйәһе Мостай Кәрим бына шулай тигәйне. Йәшәгән йылдарым буйынса хәҙер мин остазым Рәми Ғариповтан күпкә оломон. Ләкин тормош ҡуйған ҡатмарлы һорауҙарға яуап таба алмай ҡаңғырған саҡтарымда мин үҙем дә һиҙмәстән: "Бындай ваҡытта Рәми ағай нисегерәк эшләр ине икән?" - тип һорағаным, уның менән кәңәшләшкәнем бар. Ошолай өндәшер, кәңәшләшер кешеләреңдең булыуы ниндәй ҡыуаныс. Арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең аҡылын нығыраҡ хәтерләйек, әйтеп ҡалдырған кәңәштәренә йышыраҡ ҡолаҡ һалайыҡ, ҡәҙерле милләттәштәрем!

*Ирлек булһын шағирлыкта,*
*Шағирлыкта ирлек булмаһа,*
*Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән,*
*Дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа?*

Рәми Ғарипов үҙенә лә, башҡаларға ла бына шундай ҡаты талап ҡуйып иҡад итте. Уның әйткән һүҙе һуңламаны. Үҙенә күрергә насип булмаһа ла, шиғырҙары - яңы Башҡортостан өсөн көрәштең үҙәгендә, яңы быуындарҙы үҫтереүҙә ышаныслы көс һәм таяныс.

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

---

*ҺАБАҠТАР*

# ТЕЛӘГӘНЕН...

## кеше үҙе яулай

Бер кеше урам буйлап үтеп барғанда тоҡсай тотоп торған ҡартты һәм уны уратып алған балаларҙы күреп ҡала. Ҡарт балаларҙың һәр теләген үтәй икән. "Мин уйынсыҡ машина теләйем", ти бер малай. Һәм ҡарт тоҡсайҙан уйынсыҡ машина алып бирә. "Ә миңә яңы күлдәк кәрәк", ти ҡыҙыҡай. Ҡарттың тоҡсайынан әрәяңы күлдәк килеп сыға. "Был бит тылсымсы", тип уйлай күҙәтеп торған кеше. Һәм балаларҙың таралышҡанын көтөп ала ла, ҡартты тотоп алып, тоҡсайына тығып, өйөнә алып ҡайта. Тоҡсайҙы сисеп: "Хәҙер һин минең теләктәрҙе генә үтәйәсәкһең", - ти кеше.

- Ярар, - ти ҡарт, - әйт теләгеңде.
- Донъялағы иң шәп машинала йөрөгөм килә.

Ҡарт тоҡсайынан машинаның асҡысын сығарып бирә. Ә кеше ҡартты өйөнә бикләп сығып китә. Бер аҙнанан ҡайтып, ҡартты әрләргә тотона:

- Һин мине алдағанһың. Минеке кеүек ҙур һәм матур машиналар урам тулы. Миңә бер кем дә иғтибар итмәй.
- Ни кәрәк һуң һиңә?
- Миңә күп аҡса кәрәк.

Ҡарт тоҡсайынан чек сығарып бирә. Теге кеше өйөн бикләп, йәнә сығып китә. Аҙна үткәс, тағы асыуланып ҡайта:

- Һин мине алдағанһың. Мин баҙарҙа йөрөп, йәнем теләгәнде һатып алдым. Ләкин башҡа кешеләр ҙә шул уҡ әйберҙәрҙе һатып алды.
- Ни теләйһең?
- Донъялағы иң матур ҡатын-ҡыҙ минеке булһын, - ти кеше һәм ҡартты бикләп, тағы ла сығып китә. Бер аҙнанан һуң ҡайтып, йәнә ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә:
- Иң гүзәл ҡатын-ҡыҙ өсөн барыһын да эшләргә әҙер булдым. Ә уға аҡсам ғына кәрәк булған икән.
- Һин өс теләк әйттең, ләкин теләгәндәреңде һораманың, - ти ҡарт.
- Нисек инде улай?
- Һин машина һораның, ә ысынында хөрмәт теләнең, аҡса һораның, тик үҙаллылыҡ теләнең, ҡатын-ҡыҙ һораның, ләкин мөхәббәт теләнең. Хөрмәт, үҙаллылыҡ һәм мөхәббәтте мин һиңә бирә алмайым. Уларҙы кешеләр үҙҙәре яулап ала. Хәҙер мин китәм.
- Мин һине ебәрмәйем, - ти кеше.
- Мин теләгән ваҡытта китә ала инем.
- Ни өсөн китмәй, теләктәремде үтәнең һуң?
- Бер аҙ ял итеп алырға теләнем... - ти ҙә ҡарт, тоҡсайына инеп юҡ була.

ЗАУЫҠ

УРАЛБАЙ МОСТАФИН

# ЮҠ, ЙӨРӨМӘ, ЙӘНЕМ, КҮКТӘН ЭҘЛӘП,

## Бар бәхетең фәҡәт Ерҙәлер…

### Үҙгәреү

Үҙ донъябыҙ беҙгә оҡшамай, тип
Йөрөгәндә уны үҙгәртеп,
Байраҡтарҙың төҫтәренә күндек,
Өйрәнерҙәр әле күҙҙәр, тип.

Бөтә ялтыр Ҡояш түгеллеген
Аңғартһа ла алыҫ Етегән,
Күккә ҡарап тормош һабаҡтары
Алырға ла аҡыл етмәгән.

Ят ерҙә лә кеше көнлө кеше,
Эт-беттәре әсе тешләшә.
Зиннәт, мөлкәт, йылы урын өсөн
Кеше менән кеше этләшә.

Яттарҙың да күпкә күҙе ҡылый,
Унда ла күп хәсрәт, хәшәрәт:
Ир-аттары йөрөй зина ҡылып,
Ҡыҙ-ҡырҡыны йөрөй шәп-шәрә.

Хәҙер күптәр кире ҡайтып килә
Сит илдәрҙән күҙен күгәртеп.
Аҡ елкәндәр, һүҙҙәр шәүләһендә
Нимә ҡылдыҡ донъя үҙгәртеп?

Донъябыҙҙы элек беҙ үҙгәртһәк,
Бөгөн донъя беҙҙе үҙгәртә:
Берәүҙәрҙе ала боғаҙынан,
Берәүҙәрҙе әрһеҙ йүгертә.

### Таш

Ниңә, таш бәғерле, тиҙәр,
Таштарҙың да бар йәне.
Йәнһеҙ булһа, ҡышын туңып,
Яҙын иламаҫ ине.

Йәнһеҙ таштарға һыйынып
Мүк, үлән үҫмәҫ ине.
Мүк, үләнде ылыҡтыра
Шул таштың йылы тәне.
Аҫылташҡа, саҡматашҡа
Таштарҙы бүлмәҫ инек.
Йәндәре йәнселгәндәргә,
Таштай нығ, тимәҫ инек.

Ниңә бөтә бәләләрен
Кеше һала таштарға?
Таштың ни зыяны тейгән
Эшкинмәгән баштарға?
Мүкләнһә лә, екләнһә лә
Таштарҙың юҡ кәбере.
Ҡәбере изге булһа ла,
Кешенең юҡ ҡәҙере.

Өй нигеҙе, ҡәбер ташы,
Ҡәлғәләр, мәмерйәләр...
Затлы таштар көҫәй ирҙән
Бисәләр, һөйәркәләр.
Мунса ташы, йөҙөк ҡашы...
Кем ташҡа таш бәргеләр?
Ташҡа бәйләнгән ғүмерҙәр,
Ташҡа ҡала ҡәберҙәр.

### Был донъяның һынауҙары хикмәтлерәк…

Теге донъя әҙерләгән михнәттәрҙән
Был донъяның һынауҙары хикмәтлерәк.
Әкиәттәге һый-зат тулы йәннәттәрҙән
Бөгөн йәшәү, әлбиттә лә, ҡиммәтлерәк.

Үҙ нәфсеһен ҡасан әҙәм тыя алған,
Иң кәрәкле нәмәһен кем туйға һалған?
Бөтәбеҙҙә игелеккә тәүбә ҡылһаҡ,
Ҡалмаҫ ине был донъяла яла, ялған.

Ниндәй бәхет бирҙе икән Аллам миңә,
Тәҡдиремде яҙып ҡуйып маңлайыма?
Әллә инде минән йәлләп бирмәгәнен
Бирҙе микән икенсе бер малайына?

Ямандар бар арабыҙҙа - иманһыҙҙар,
Яуызлыҡта, яһиллыҡта арманһыҙҙар.
Тәбиғәтте йыуындыра ағын һыуҙар,
Шул һыуҙай ҙа була алмай дарманһыҙҙар.

Әҙәм аңы тәбиғәтте, Күкте "еңде"
Атом, гендың кендегенә үтеп инде,
Ләкин Ерҙә Илаһи аң ҡорған донъя
Вайымһыҙҙар арҡаһында ҡырылыр инде.

Эй, Хоҙайым, Һинең алда миңә оят!
Доға белһәм, уҡыр инем көн дә аят.
Хөкөмөңә буйһонорға күптән әҙер:
Иманһыҙлыҡ йоҡоһонан мине уят!

Яҙҙы микән маңлайыма бәхет Тәңрем,
Әллә туҙып бөтөр микән терһәктәрем?
Ғәмәлдәрҙә, ғәм, сәмдәрҙә Ул хаҡ булһа,
Нахаҡ микән минең ябай теләктәрем?

Мин - бисара, инһәм гонаһ ҡараһына,
Ҡыҫылмайым алла-мулла араһына.
Минең алда уларҙың да гонаһы бар:
Ярлыҡау юҡ ябай әҙәм балаһына.

Манаранан мулла тороп яр һалыуы -
Шул булдымы көндөң көнгә ялғаныуы?
Бәлки, шулай икән, тип тә уйлар инем,
Кәмеп барһа мәхәлләнең зарланыуы.

Тәңребеҙҙән тормош йөгөн һөйрәтәлер,
Өйрәтәлер, көйрәтәлер, төҙәтәлер.
Бизмәнен дә дәрәжәләр кәмеп китһә,
Йәнебеҙгә һабаҡ биреп, шөрләтәлер.

### Маһмай йөрөй бағананан бағанаға…

Моң илендә йондоҙмон, тип алйығандар -
Ояһынан йүгереп сыҡҡан алйырҙандар.
Алйырҙандан бигерәк мине ғәфү итер,
Ҡарғаларҙы һандуғастан айырғандар.

Яһиллыҡта йөрөгәндәр йәшәй бирә,
Ярлылыҡта көйөнгән дә йәшәй бирә...
ХаҡТәғәлә рәнйетмәй шул бәндәләрен:
Кем булһа ла, ярлыҡаулы яҙмыш бирә.

Ҡайғы, зарҙы күрмәгәнгә күңеллерәк,
Башын ташҡа ормағанға еңелерәк.
Хаҡлыҡ юлын тапағанға – сырхау йөрәк,
Сөнки хаҡлыҡ хаҡы бөгөн – һыныҡ көрәк.

Холҡобоҙға хас булһа ла ялағайлыҡ,
Гел икмәккә бал да ҡаймаҡ яғалманыҡ.
Бер кемгә лә шөһрәт, абруй өҫтәмәйҙер
Алабайлыҡ менән ялған яһалмалыҡ...

Шахматсыға өҫтөнлөктәр бирә гамбит,
Һәләтеңә күрә ул да һәйбәт ғәм бит.
Һәләтенә күрә - хөрмәт! Ләкин ҡай саҡ
Ҙур хөрмәттә үҙе - түрә, улы - бандит.

Хозур донъя ҡорған Ерҙә даһи Рәссам,
Биҙәктәрен йыуып тора яҙғы ләйсән.
Камиллыҡҡа "ҡаш төҙәтәм" тигән дәрттә
"Күҙ сығарып" ҡуймаҫ тимә ижади сәм...

Әкиәттәрҙә генә байлыҡ күктән яуыр;
Унда әҙәм турғайҙы ла тотоп һауыр.
"Анһат йәшәр кәрәк, бөгөн тормош ауыр",-
Тип зарланған үҙ зарынан үҙе ауыр.

Маһмай йөрөй бағананан бағанаға,
Бағына ла, бағанаға тамға һала.
Күпме ир-ат илгә терәк булыр ине,
Табынмаһа осраған бер "бағана"ға.

### Рәхәт, тинең, ҡосағымда һөйөлгәндә…

Әйтсе, йәнем, нимә булды бөгөн һиңә:
Ниңә йөрәк биленләй ҙә, тибенһенә?
Әллә шулай иртә туҙып бөттөләме,
Әллә килеп абындымы тәүбәһенә?

-Бер нәмәгә эшкинмәйһең, - тине ҡатын,
Үҙе иһә, иңсиф атлы көмөш, алтын.
Кем бизмәне тоғро үлсәп, дөрөҫ әйтер:
Бармы икән был донъяла йәшәр хаҡым?

Бөтә яҡтан килешкәнһең, һәйбәт, күрәм,
Буй-һыныңа иң юғары баһа бирәм.
Шундай камил емешенә еңмешлекте
Хаҡ Тәғәлә, аңламайым, ниңә биргән?

Эй, ҡыҙыҡбыҙ инде: төндә һаташабыҙ,
Өндә түгел, төштә йәшәп маташабыҙ.
Фәрештәләр менән төндә бейейбеҙ ҙә,
Иблес менән көндөҙ туйҙа ҡатнашабыҙ.

Һөйгән йәрем һәләттәрҙә уңһын ине,
Гүзәлдәрҙең дә гүзәле булһын ине.
Эй, хыялый! Унған, һылыу, матур булһа,
Ҡапсығынды киң тот! Һиңә булыр ине...

Һин бит минең һөйөнөсөм, көйөнөсөм,
Белһәң ине йөрәгемдең һөйөү көсөн.
Йәшәмәһәм был донъяла һинең өсөн,
Уҡылған да булыр ине минең "өсөм".

Тормош, берсә йондоҙҙарға күтәрәһең,
Берсә төпһөҙ упҡындарға этәрәһең.
Бер күтәреп, бер этәреп иркәйәнде
Ыҙалатып йә илатып бөтөрәһең.

"Рәхәт!" тинең, ҡосағымда һөйөлгәндә,
Иркәләнеп, бала кеүек һөйөнгәндә.
Тиҙ оноттоң. Ләкин иҫкә төшөрөрһөң,
Ҡайғы-хәсрәт усағында көйөнгәндә.

Һыҙлайҙыр, илайҙыр, сыҙайҙыр, уф, тәнем:
Аҙапһыҙ, ғазапһыҙ булманы үткәнем.
Ғәмдәрем, сәмдәрем йәнемдә. Хәтерҙә
Иң тәүге һылыуҙың күҙҙәрен үпкәнем.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЭШКӘРТЕҮ СӘНӘҒӘТЕБЕҘ ЮҠ ИКӘН…

## көнкүрешебеҙ ҙә яҡшырмаясаҡ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Маһһар ИҪӘНБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы:** Башҡортостан иҡтисадын, сәнәғәтен үҫтереүгә бәйле бик мөһим мәсьәләләр хәл ителмәй ҡала килә. Әлбиттә, республика иҡтисады, әкренләп булһа ла, үҫеш юлын кисерә. Ләкин байтаҡ предприятиеларҙы аяҡҡа баҫтырыуы бөгөн бик ҡыйын. Мәҫәлән, ағас эшкәртеү сәнәғәтен үҫтереүгә урмандың федераль үҙәк ҡарамағында булыуы ҡамасаулай. Бынан тыш, совет замынындағы фабрикалар ябылғас, ағас эшкәртеү сәнәғәте һүнеп ҡалғайны.

Яҡын арала Сибайҙа "Төньяҡ-көнсығыш районларын социаль-иҡтисади яҡтан үҫтереү" программаһы сиктәрендә инвестицион форум үтәсәк. Был саранан һуң айырым предприятие-ойошмалар яңы һулыш алыр, тип көтөлә. Сөнки әлегә программаға ярашлы күҙгә күренерлек ҙур эш башҡарылмаған. Был тәү сиратта финанс ресурстарының етешмәүенә бәйле.

Алдағы йылдарҙа иҡтисадыбыҙ ышаныслы үҫешһен тиһәк, сәнәғәттең эшкәртеү тармаҡтарын күтәреүгә тағы ла күберәк иғтибар бирергә кәрәк. Республика сәнәғәтенең кәрәкле продукттар етештереү буйынса структураһы юҡ. Беҙҙә файҙалы ҡалдыҡтарҙы, ауыл хужалығы, урман ресурстарын эшкәртеү тармаҡтары, предприятиелар йылдам темптар менән үҫешә алмай. Машиналар төҙөү, ағас эшкәртеү, шулай уҡ аҙыҡ-түлек етештереү комплекстарын нығлап үҫтереү талап ителә. Ә төньяҡ-көнсығыш районларында төҫлө металдарҙы комплекслы эшкәртеү мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Мәғдән сығарыу менән генә ул районлар файҙа күрмәй. Беҙ металдарҙы байытабыҙ ғына, концентраттар иһә Свердловск, Силәбе һәм башҡа өлкәләргә китеп, шунда эшкәртелә. Ә беҙҙә карьерҙар һәм аҡтарылған тау тоҡомдары ғына тороп ҡала. Республика етәкселеге элек-электән ошо мәсьәләләргә иғтибар биреп еткермәне. Күп һөйләргә яратабыҙ, әҙ эшләйбеҙ. Күрше Татарстан республикаһына күҙ һалһаҡ, унда машиналар төҙөү, химия, нефть химияһы тармаҡтарына, иген, урман эшкәртеүгә ҙур иғтибар бирелеүен күрәбеҙ. Ул төбәктә дөйөм сәнәғәттең күпселек өлөшө тап эшкәртеү тармаҡтарына тура килә. Ә беҙҙәге сәнәғәттең 76 процентын табыу тармаҡтары биләп тора. Шуға күрә беҙҙә иҡтисад үҫеше лә тотҡарлана, халыҡтың йәшәйеш кимәле лә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Эшкәртеү сәнәғәтенә ҡарағанда, табыу тармаҡтарында кеше көсө аҙыраҡ файҙаланыла. Бына шуның өсөн дә беҙҙә эшһеҙлек юғары кимәлдә ҡала килә. Эшкәртеү, етештереү предприятиелары күберәк асылған һайын, эш урындары ла күбәйер ине.

Әлеге көндә республика районларының сәнәғәт структураһын яңыртыу, модернизациялау Өфө ғилми үҙәгенең Социаль-иҡтисади тикшеренеү институты тарафынан башҡарылған эштәрҙең береһе булып тора. Әммә барыһы ла финанслауға һәм етәкселектең был мәсьәләләргә мөнәсәбәтенән тора.

**Мөнир ИҠСАНОВ
яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҮҪМЕРҘӘР ҺАУЛЫҒЫ...

## йылдан-йыл насарая

■ Башҡа йәшелсәләргә, хатта ҡайһы бер еләк-емеш һәм сәтләүектәргә ҡарағанда, картуфтың файҙаһы күберәк. Ул ҡан баҫымын да нормаға килтерә. Диетолог Сингрид Гибсон һәм Британияның диетологтар ассоциацияһы вәкиле Сиан Портер билдәләүенсә, картуфта көнбағыш һәм сәтләүектәргә ҡарағанда - селен, банан менән сағыштырғанда 5,5 тапҡырға - күҙәнәклек, өс авокадаға ҡарағанда - С витамины күберәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, гипертония менән яфаланыусыларға көнөнә ике тапҡыр картуф ашау файҙалы. Ә бына картуфтың һимереүгә килтереүе тураһындағы хәбәр уйҙырма ғына булып сыҡҡан.

■ Көнсығыш һәм Урта диңгеҙ халыҡтары аш-һыу әҙерләгәндә яратып ҡулланған зәғәферән (шафран) тәмләткесе оло кешеләрҙең күҙҙәрен һуҡырайыуҙан һаҡларға ярҙам итә. Австралия һәм Италия ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр ваҡытында оло йәштәге кешеләр өс йыл дауамында зәғәферән ҡулланған һәм уларҙың күреү һәләте бермә-бер яҡшырған. Был тәмләткесте ҡулланыуҙан туктау менән күреү һәләте лә насарая башлаған. Ғалимдар билдәләүенсә, зәғәферән оло йәштә һуҡырайыуҙан ҡотҡарып ҡына ҡалмай, ә тәбиғи ҡояштан һаҡлаусы күҙлек ролен дә үтәй һәм күҙҙәрҙе сағыу ҡояш нурынан зарарланыуҙан һаҡлай.

■ Инглиз ғалимдары D витаминды етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк. Әгәр ҙә асыҡ һауала булғандан һуң тирегеҙ һиҙелерлек алһыуланһа, тимәк, организм 20000 ЕД D витаминына байыған. Тик нисек зыян килтермәслек итеп дөрөҫ ҡыҙынырға һуң? Тәүҙә ҡояшта 10 минут самаһы ғына ҡыҙыныгыҙ һәм көн һайын был ваҡытты 1-2 минутҡа арттыра барығыҙ. Тап ошолай итеп ҡыҙынғанда ғына һаулыҡты нығытырға була. Ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ булыу тире яман шешенә килтереүе бар. Ҡайһы бер үләндәр һәм дарыуҙар тиренең ҡояшҡа тәьҫирлеген көсәйтеүен оноторға ярамай. Был исемлеккә һары мәтрүшкә, йөрәк ауырыуҙарынан дарыуҙар (кордарон), бөйөр өҫтө биҙе гормондары инә.

■ Рәсәйҙә һуңғы биш йыл эсендә үҫмерҙәр араһында сирлеләр һаны 90 процентҡа күтәрелгән. Илдәге был хәлде үҙгәртеү өсөн әлегә дәүләт программалары юҡ, ти белгестәр. "Педиатрҙар дүрт йыл элек үҫмерҙәрҙең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн федераль программа тәҡдим иткәйне. Ул илдең хеҙмәт, репродуктив, хәрби потенциалын һаҡларға булышлыҡ итер ине", - ти илдең баш педиатры, Рәсәй Медицина фәндәре академияһының Балалар сәләмәтлеге ғилми үҙәге директоры Александр Баранов. Академик был ситуацияны профилактик прививкаларҙы киңәйтеү иҫәбенә хәл итергә була, тип белдерә. Бөгөн балаларға төрлө инфекцияларға ҡаршы 11 мотлаҡ прививка эшләнә, белгестәр әйтеүенсә, был исемлеккә һыу сәсәге, пневмококк, папилломавирус һәм ротавирусы инфекцияларына ҡаршы прививка өҫтәргә кәрәк.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ШӘРИҒӘТ БУЙЫНСА КЕЙЕНГӘНДӘР...

## милләткә ҡурҡыныс менән янаймы?



**Ҡайһы саҡ юҡ урында ғына бәхәс килеп сыға. Берәү, беҙҙең Ер шары эллипс, шар формаһында, ти, икенсеһе иһә, унда тигеҙһеҙлектәр, ҡалҡыулыҡтар, тауҙар, соҡор урындар бар, тип тартҡылаша. Һәр кем үҙ дәлилен килтереп, сәғәттәр буйына бәхәсләшергә әҙер. Бәхәстәр, башлыса, бер үк хәҡиҡәтте, күренеште төрлөсә аңлауыбыҙ сәбәпле килеп сыға.**

Кемдәргәләр, мәҫәлән, дингә килгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың шәриғәт талаптары буйынса кейенеүе уларға ғәрәпкә һәм төрөккә әйләнеү менән янай кеүек тойола. Бер танышым: "Башҡорттар бер ҡасан да былай итеп кейенмәгән, мосолманса кейенеү - ул халыҡтың ассимиляцияға бирелеүенә бер дәлил", - тип ғәжәпкә һалды бер саҡ. Дин буйынса кейенгән мосолман ҡатын-ҡыҙҙар күбәйеүе Башҡортостанда ғына түгел, донъяның күп өлөштәрендә ассимиляциянан ҡурҡҡан "халыҡ киләсәген ҡайғыртыусыларҙың" яраттҡан темаһына әүерелә бара. Ислам терроризмы, экстремизмын яҡтыртырға яратыусы матбуғат баҫмалары ла ҡайһы саҡта хиджаб кейгән ҡыҙҙарҙы сәйнәүгә күсеп китә.

Гүзәл заттарыбыҙҙың шәриғәт ҡанундары буйынса кейенеүендә фәжиғә күргән, башҡорт ҡыҙҙары ғәрәпкә, төрөккә әйләнә, тип яу һалған ҡайһы берәүҙәргә шуны әйтергә була. Беренсенән, әгәр кейем халыҡтың ассимиляцияға бирелеүенең төп сәбәбе булһа, Ер шарында милләттәр һаны бик аҙ ҡалыр ине. Кейем халыҡсанлыҡты, айырым милләткә ҡарауҙы күрһәтеүсе төп элемент тигән логикаға таяныл эш итһәк, XIX быуат ахырында, XX быуаттың тәүге яртыһында уҡ милли кейемен замансаға алыштырған башҡорттар ҙа юҡ булып һаналыр ине. Икенсенән, шәриғәт ҡанундары буйынса тегелеп, бөгөн беҙҙә һатыуҙа булған кейемдәрҙең ғәрәптәрҙеке йә төрөктәрҙеке икәнен кем иҫбатлай ала? Был халыҡтарҙың милли кейемдәре, тышҡы биҙәлеше бөгөн беҙҙең диндә булған ҡыҙҙар кейгән кейемдәрҙән ҡырҡа айырыла. Өсөнсөнән, дин ҡушҡанса кейенеүсе ҡатын-ҡыҙҙар күпме һуң беҙҙең республикала? Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында улар егерменән бер өлөштө тәшкил итәме икән? Артабан шундай һорау: улар халҡыбыҙҙың бөсен төшөрөрлөк берәй насар эш эшләйме? Милләт йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтерәме? Әллә енси бәйләнеһеҙлек арҡаһында тыуған балаларын ташлап китеүселәрме, боҙоҡлоҡ ҡылыусыларымы улар? Һыра тотоп, урамдарҙа ҡыйшан-мыйшан йөрөйҙәрме, иҫерел, ҡайҙа етте шунда тәгәрәп яталармы? Юҡ! Улар быңдай аламалыҡтарҙан алыҫ. Хатта Исламды күрә алмағандар ҙа быны кирелән раҫлай алмаҫ. Тик, ниңәләр, "халыҡ мәнфәғәтен" яҡлаусы ҡайһы берәүҙәр уйынса, тап шәриғәт буйынса кейенеүсе ҡыҙҙар халҡыбыҙға ҡурҡыныс менән янай. Улар арҡаһында милли асылыбыҙҙы юғалтабыҙ, йәнәһе.

Был дәүгәләрҙе ата-бабалары икенсе дин тотҡан, үҙҙәре секуляристик йәмғиәттә йәшәгән европалылар әйтһә - бер хәл әле. Ләкин мосолман кейеме тап беҙҙе, башҡорттарҙы, ҡурҡыта бит! Милли асылыбыҙҙы тергеҙәбеҙ, тип ҡыҫҡырған ваҡытта уның нигеҙе булған диндә ситкә ҡуйыу дөрөҫ микән? Башҡорттарҙың нисәмә ихтилалдан һуң ҡырылып бөтмәүе, мәҙәниәте, теле һаҡланыуында, ахырҙа, милләт булып һаҡланыуында Исламдың ҡыҫылышы булманымы икән ни? Рәсәй илендә генә нисәмә милләт юҡҡа сыҡҡан. Күпмеһе, милләтенең атамаһын һаҡлаһа ла, телен, мәҙәниәтен юғалтҡан. Улар араһында ла ғорур, көслө халыҡтар булғандыр бит. Ә шул тиклем һынауҙар үтеп тә, үҙен һаҡлап ҡалған башҡорт халҡы XX быуатта, диндән баш тартҡас ҡына, өлөшләтә ассимиляцияға бирелгән. Диндә ситкә ҡуйыуыбыҙ арҡаһында бөгөн эскелек, аҙғынлыҡ кеүек социаль афәттәр милләтебеҙҙе ҡыра.

Диндә инҡар итеп, рухи тамырҙарын юғалтҡан Европа халҡына әйәрергә һәм оҡшарға тырышыу кәрәкме беҙгә? Европалыларҙан белемгә ынтылыу, менеджмент оҫталығы, алдан күрә һәм анализлай белеү һәләтен алыу мотлаҡтыр. Ләкин Көнбайыш әхлағына мохтажлығыбыҙ бармы? Улар үҙҙәре лә хәҙер тормоштан рухи эстәлекте, диндә алыу сәбәпле хаталанғанын аңлай. Халыҡты енси бәйләнеһеҙлеккә килтергән, тыуым кәмеүенә, гомосексуализм кеүек боҙоҡлоҡтарға сәбәпсе булған "яңы әхлаҡ" уларҙың үҙҙәренә лә хуш килмәй. Сиктәр асылғас, рәсәйлеләр ҙә ошо иректе һуларға ашыҡты. Был турала Беренсе канал алып барыусыһы Познерҙың, беҙ (ул Рәсәй халҡын күҙ уңында тотто. - **Авт.**) Көнбайышты бер өлкәлә лә ҡыуып етмәнек, әммә аҙғынлыҡта әллә ҡайҙа артта ҡалдырҙыҡ, тигән хаҡ һүҙҙәре бар. Ни өсөн беҙ Көнбайыштың яҡшы һыҙаттарын түгел, насар ҡылыҡтарын үҙләштерергә тейеш? Милләт өсөн ярым шәрә кейенеп, башҡортса аралашып, ҡулына һыра-тәмәке тотҡан ҡыҙҙар борсолоу тыуҙырырға тейеш. Халыҡтың киләсәген ҡайғыртаһың икән, ошондай милләттәштәрҙе тәрбиәләү йүнәлешендә эш алып бар, әйҙә.

Кейемгә килгәндә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме, ысынлап та, бөгөн дин юлына аяҡ баҫҡан ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ кейеп йөрөгәндәргә лә, ғәрәптәрҙекенә лә, төрөктәрҙекенә лә оҡшамаған булған. Милли колорит уны үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ иткән. Тик эш күҙгә беренсе салынған деталдәрендә түгел, ә уның асылында. Уның асылы иһә, ҡатын-ҡыҙҙың ысын матурлығы булған паклыкты ят күҙҙәрҙән һаҡлау. Башҡорт милли кейеме шәриғәт ҡанундарына тап килмәй, тип әйтергә кемдең батырсылығы етер? Кәмендә, революцияға тиклем башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары дингә ярашлы кейенгән. Был факт "бер ҡасан да башҡорттар былай итеп мосолмандарса кейенмәгән" тип раҫлауҙы инҡар итә. Ғәрәпсә, төрөксә кейенмәһә кейенмәгәндер, әммә Ислам дине ҡанундары буйынса кейенгән. Ислам берәүҙән дә ғәрәптәрсә кейенеүҙе талап итмәй. Ул, башҡа енес вәкилдәренең күңелендә фетнә тыуҙырмаһын һәм аҙғынлыҡҡа сәбәпсе булмаһын өсөн, айырым тән өлөштәрен ҡаплауҙы талап итә.

Дин юлына аяҡ баҫҡан һәм уның талаптарына ярашлы кейенгән гүзәл заттарыбыҙ башҡорт мәҙәниәтен, тарихын, халҡын ихтирам итмәй түгел. Уйҙарында халыҡты юҡҡа сығарыу теләге лә юҡ уларҙың. Улар кемдәргәлер "ят" булып күренгән кейемдәрҙе Аллаһы Тәғәлә әмеренә бойһоноп, Уның талаптарына яуап биргән өсөн ҡулланалар. Милли үҙенсәлегебеҙҙе күрһәтеп торған, иңле, шул уҡ ваҡытта шәриғәт ҡанундарын иҫәпкә алып милли кейемдәр тегелһә, һис шикһеҙ, унан да баш тартмаҫтар ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дин тураһында хәбәрҙар булмаған, йә уны аҙ белгән кешеләр өсөн дин һәм милләт бер береһен инҡар итә торған ҡаршылыҡтар булып тойола. Дин тотоп йәшәй башлаһаң, мотлаҡ башҡорт икәнлегеңде онотоға кәрәк, тип уйлай ҡайһы берәүҙәр. Килеп сыҡҡан аңлашмаусанлыҡтар ҡараштарҙағы дошманлыҡтан түгел, ә аҙ һәм дөрөҫ булмаған мәғлүмәткә эйә булыуҙан килә.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

✓ *Уны йоҡлар алдынан һәм иртән уяныу менән көн һайын кәм тигәндә 10 тапҡыр уҡығыҙ. Яҙылғандар бер аҙҙан үҙҙәре үк төпкө аңығыҙға йоғонто яһай башлар.*



*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*

# ЙӘШӘҮ РӘҮЕШЕМ ...

## Ислам ҡанундары буйынса



**Юл-транспорт фажиғәһе эҙемтәләрен, бик оҙаҡлап компьютер артында ултырыуымды иҫәпкә алмағанда, үҙемде сағыштырмаса сәләмәтмен, тип иҫәпләйем.**

Исламса тормош рәүеше алып барырға тырышам: йән һәм тән сәләмәтлеген һаҡлау - һәр мосолмандың бурысы. Иҫерткес эсемлекте ауыҙыма ла алмайым, тәмәке тартмайым, кешегә яуыҙлыҡ уйламайым, үс тотмайым һәм үс алмайым, кем хаҡында булһа ла насар һүҙ әйтмәҫкә, уның тураһында насар уйламаҫҡа тырышам. Баҡсала эшләргә яратам, ҡышын саңғы шыуам. Бик арып, аҫтыҡҡа саҡ барып баш терәгән көндәрҙе иҫәпкә алмағанда, йоҡлар алдынан бүлмәмдә мотлаҡ туҙанды һөртөп алам. Сәләмәт тормош алып барыу буйынса үҙ принциптарым бар: ҡәтғи рәүештә магазин һыуҙарын, һуттарын эсмәйем. Фирма шешәләрендә сыҡҡан шифалы һыуҙарҙы алғылайым. Синтетик һауыт-һаба ҡулланмайым. Көплө кекс-маҙар алмайым, кәнфит-печеньены ла бик сикле ҡулланам. Уларҙа зарарлы консерванттар күп була. Шул сәбәптән консервалар ҙа һатып алмайым. Үҙ баҡсамдағы емеш-еләкте ҡулланам, ҡышҡылыҡҡа туңдырып һаҡлайым йәки киптерәм. Шуның өсөн магазиндан емеш-еләк алмайым тиерлек. Итте мөмкин тиклем ауылдан һатып алабыҙ. Бройлер тауыҡты ашамаҫҡа тырышам. Ғөмүмән, ген үҙгәртеп етештерелгән ризыҡты ҡулланмаҫҡа тырышам. Былар барыһы ла минең сәләмәтлекте тәьмин итә, тип ышанам.

**Сәйҙә МӨХӘМӘТОВА.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Ауырыу сәбәптәре

**Ҡайһы бер ауырыуҙарҙың һәм проблемаларҙың социаль сәбәптәрен барлауҙы дауам итәйек:**

- Гипотония - көсһөҙ ихтыяр, үҙ-үҙенә ышанмаусылыҡ, тормош позицияндың юҡлығы; мускулдарҙың, шул иҫәптән йөрәктең, тонусы етешмәүе, оҙаҡ йоҡо.
- Даими юғары температура - шатлыҡ юҡлығы, түбән тирбәлеш; паразиттар, вирустар булыу.
- Психик ауырыуҙар - дөрөҫ булмаған тормош принциптары; ендәр (бирелә́р) булыуы, баш мейеһе эшмәкәрлегендә тайпылыш.
- Онкология - үпкәләүҙәр, агрессия, һөйөү етмәү; беренсе агрессив күҙәнәктән башҡаларына агрессия таралыуы.
- Алкоголизм - Аллаһы Тәғәлә барлығына шикләнеү, тормошҡа ҡыҙыҡһыныу юғалтыу, проблемаларҙан ҡасыу тойғоһо; ихтыярһыҙлыҡ, башҡаларға буйһоноу, яуаплылыҡтың булмауы.
- Тыумыштан бирелгән ауырыуҙар - тыуырға теләк булмау (теләнмәгән бала), йомшарған карма (хаталарҙы төҙәтергә, мөхәббәт тупларға тағы бер мөмкинлек).
- Шәкәр ауырыуы (80 процент) һәм ҡурылдай астмаһы (15 процент) - некротик бәйләнештәр (үлгәндәргә бәйлелек); энергияның балансланмауы һәм килешелмәгәнлеге һөҙөмтәһендә организм системаһында тайпылыш.
- Эс ҡатыу - үткәндәр менән йәшәү, һаҡсыллыҡ, ҡарунлыҡ, ялған принциптар; хәрәкәт етешмәй (һаҙлыҡ), тиҙәк таштары, паразиттар, һыуһыҙлыҡ.
- Артрит, артроз - үҙ-үҙенә тәнҡит менән ҡарау (үҙенә йыя), эгоизм (үҙенә тарта), асыу һаҡлау; хәрәкәт етешмәү, һыу-тоҙ һәм минерал, атап әйткәндә, кремний, режимының боҙолоуы.
- Түлһеҙлек - яуапһыҙлыҡ, буйһоноусанлыҡ, әсәлек инстинктының, шатлыҡтың (илаһи нурҙың), бәхетле ғаилә тормошо перспективаһының юҡлығы, балаларҙы яратмау, ҡатын-ҡыҙҙа ир-ат энергияһының өҫтөнлөк итеүе, башлаған эште аҙағынаса еткермәү ғәҙәте.
- Венерик ауырыуҙар - ялған оялыу (мәғлүмәтһеҙлек), үҙенде түбән баһалау (кем менән булһа ла), эске агрессия (хәүефһеҙлек тойғоһон юғалтыу); шапшаҡлыҡ, талымһыҙлыҡ.
- Йоҡоһоҙлоҡ - тынысһыҙлыҡ, ялған хәүеф; тәбиғи энергияның етешмәүе, гармонияны юғалтыу, интоксикация.
- Ҡан тамырҙарының варикоз киңәйеүе - саманан тыш көсәргәнеш, мөнәсәбәттәрҙә һығылмалылыҡтың (эластичность) булмауы, үткән принциптарға тартылыу; ҡан тамырҙарында атеросклеротик ҡатламдар ултырыу, дөрөҫ туҡланмау, артыҡ ауырлыҡ.
- Вируслы ауырыуҙар - йәшертен асыу, алдаҡҡа ышаныу (талсығыу), принципһыҙлыҡ; түбән тирбәлеш.
- Геморрой - йәшерен көсәргәнеш (күпкүклек), тыныслыҡҡа ынтылыу (торгонлоҡ), бурысты үтәмәү; түбән үҙбаһа, көсһөҙ ихтыяр, тонус булмауы.
- Бөҫөр - мөйөшкә ҡыҫырыҡланыу тойғоһо, әсирлек (ҡотолорға кәрәк), ҡаршылыҡ; саманан тыш көсәргәнеш.
- Депрессия - йәндең миссияһынан ситләшеү, үҙ тәғәйенләнешендә үтәмәү; йыһан ҡанундарын аңламау, ялған сараһыҙлыҡ, йәшәү мәғәнәһенән юғалтыу.
- Тотлоғоу - үҙ-үҙенде күрһәтеүҙән ҡурҡыу, талап итеү, үҙ-үҙенә ышанмаусылыҡ; ен-бирелә́р булыуы (ҡурҡҡанда инәләр), аңдың йәрәхәте.
- Инфекция - пессимизм, шатлыҡ, бәхет юҡлығы; түбән тирбәлеш.
- Таштар - ауыр кире уйҙар, хис-тойғолар; ерҙән айырылыу, аҙ хәрәкәтсәнлек, дөрөҫ туҡланмау.
- Киста - оҙайлы йән көйөү (йыйылған), бүленгән энергияны файҙаланмау, ялған принциптар, ҡаршылыҡ.
- Фиброз - (бәйләнеш туҡымаларының ҡатыуы) - тормошта кешеләргә ҡарата ҡаты бәғерлегә әйләнеү; һығылмалылыҡ булмауы.
- Ларингит - бөтөн тауышҡа һөйләүҙән ҡурҡыу, әйтеп бөтөрөлмәгәнлек тойғоһо (үҙенә йыя), түбән үҙбаһа; түбән тирбәлеш, аҙыҡ-түлектә әселектең етешмәүе.
- Лимфа биҙҙәре - үкенеү; күңел ҡайтыу; интоксикация, тормош һабаҡтарын ҡабул итмәү.
- Тымау - аптырап ҡалыу; түбән тирбәлеш.
- Невралгия - үткәндәрҙә хәл ителмәгән проблемалар (аҫҡы аңдан ҡалҡып сыға); деструктив энергия булыу, артабан илаһи принциптарҙың боҙолоуы.
- Пеләшләнеү - яҡланыулыҡ тойғоһоноң булмауы (күҙ терәр кеше юҡ); энергияның мейегә бүлеп бирелеүе (организм рационалы).
- Һимереү - кәмһетелеү (яҡланырға теләү), көсһөҙ ихтыяр; интоксикация, организмдың шлакланыуы (организм уларҙы капсулаға әүрелдерә - май күҙәнәктәре менән ҡаплай).
- Хырлау - кеше алдында үҙенде тыйып тороу, әйтеп бөтөрөлмәгәнлек (һуңынан сығырынан сыға), саманан тыш көсәргәнеш; энергияның балансланмауы.
- Эпилепсия - саманан тыш эске көрәш, агрессия, илаһи таҙалыҡты боҙоу; ен-бирелә́рҙең булыуы.
- Бәхетһеҙ осраҡ - илаһи принциптарҙың, тирә-яҡ мөхит менән гармонияның боҙолоуы (аңларға ваҡыт бирәләр).
- Наркомания - Аллаһы Тәғәләне кире ҡағыу.
- Сал сәслелек - стрестарҙан (ҡурҡышынан ағарҙы), аҡыллылыҡ (бик күп һабаҡ алған).
- Биттәге һыткылар - үҙ-үҙең менән ҡәнәғәт булмау.
- Хроник арығанлыҡ - бысраҡ аура; икенсе донъяларға, төрлө эгрегорҙарға, бирелә́ргә һәм кешеләргә энергия биреү.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Йәшәү көсөнә - азатлыҡ

Әйҙәгеҙ, ҡағыҙ битендә йәшәүгә, тормошоғоҙҙа уңыш ҡаҙаныуға нимә ҡамасаулағанын һанап үтәйек. Бәлки, һеҙ башҡалар менән саманан тыш низағҡа инәһегеҙҙер, бәлки, юҡҡа ғына борсолаһығыҙҙыр, бәлки, сикһеҙ мөмкинлек булған урында тик ҡаршылыҡ күрәһегеҙҙер? Эшмәкәрлегегеҙҙе сикләгән бөтөн нәмәләр ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙгәреүе ихтимал, бының өсөн дөрөҫ стратегия һайларға ғына кәрәк. Бына тормошоғоҙға оҙайлы үҙгәрештәр индереүгә ярҙам итәсәк бер нисә ысул.

**1-се этап.** Ҡарар ҡабул итеү. Бөгөндән тәртибегеҙҙе, үҙ-үҙегеҙҙе тотошоғоҙҙо үҙгәртеү тураһында ҡарар ҡабул итегеҙ. Ҡағыҙға үткәндәрҙә һеҙгә зыян килтергән ғәмәлдәрҙе (бында аныҡ ваҡиғаларҙы һәм ҡулдан ысҡындырылған мөмкинлектәрҙе иҫкә төшөрөргә кәрәк) яҙығыҙ һәм күҙ алдына килтерегеҙ. Шунан үҙегеҙҙең ошо хәл-торошто тамырынан үҙгәртергә теләүегеҙ тураһындағы ҡарарығыҙҙы яҙығыҙ һәм ҡағыҙ битен караuатығыҙ өҫтөнә элеп ҡуйығыҙ. Уны йоҡлар алдынан һәм иртән уяныу менән көн һайын кәм тигәндә 10 тапҡыр уҡығыҙ. Яҙылғандар бер аҙҙан үҙҙәре үк төпкө аңығыҙға йоғонто яһай башлар. Ә төпкө (аҫҡы) аң, мәғлүм булыуынса, беҙҙең барлыҡ эшмәкәрлегебеҙ, ғәмәлдәребеҙ менән идара итә.

**2-се этап.** Саҡырыу ташлау ысулы. Хәҙер, үҙегергә ныҡлы ҡарар ҡабул итеп, туғандарығыҙға, таныштарығыҙға үҙегеҙҙең ниәтегеҙҙе белдереп, улар артабан да ыңғай йоғонто яһаһын өсөн, күнекмәләр эшләй башларға кәрәк. Кире тәртип хаҡындағы уй аңығыҙға инеү менән фекерләү процесына саҡырыу ташлағыҙ, ниндәйҙер икенсе нәмәгә ылыҡтырыусы эш башҡарығыҙ: ниндәйҙер өн йәки бер мәғәнәһе булмаған ҡыҙыҡ һүҙ әйтегеҙ, үҙ-үҙегеҙгә семетеп алығыҙ. Был көлкө кеүек тойолор, әммә мейегеҙгә инеп оялаған кире уйҙы ҡыуып сығарырға ярҙам итер. Тәбиғәттең мәңгелек ҡануны шуға ҡоролған: ахыр сиктә, һәр ваҡыт изгелек, яҡшылыҡ яуызлыҡты еңә. Үҙегеҙ лайыҡлы булған маҡсатҡа өлгәшергә ҡамасаулаған кире уйҙарға һәм тәртипкә саҡырыу ташлау менән улар тиҙҙән һеҙҙең мейе һарайында саҡырылмаған ҡунаҡ икәнлектәрен "аңлаясаҡ" һәм ошо батшалыҡты мәңгелеккә ташлап китеүҙән дә яҡшыраҡ "юл тапмаясаҡ".

